> ✓ *Граждандар һәм эштәр менән закондар түгел, ә үҙен иң аҡыллыһы тип иҫәпләгән буйһоноусылар һәм буйһондороусылар, судтар идара иткән ерҙә ҡайғы хөкөм һөрәсәк.*
>
> *М. Кутузов.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№21 (439)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Гел еңгәндәр - тыныслана,
еңелгәндәр сәмләнә



5

Үҙегеҙҙе яҡлаған кеүек...
телегеҙҙе яҡлағыҙ!



7

Башҡортлоҡ - Хоҙай тарафынан ҡуйылған һынау,
шул һынауҙы үтә алмағандар икенсе милләткә күсә



8-9

Алда булһын бик күп туйҙар:
Өй туйҙары, бәпес туйҙары




15

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эскеһеҙ туй, табын һәм йыйындарҙа котлау һүҙҙәре әйтеүҙе, теләктәр теләүҙе айыҡ тормош йолаларының береһенә әйләндереү мөмкинме?

***Әхиәр ҒҮМӘРОВ, уҡытыусы:*** Был мөмкин генә түгел, ә кәрәк! Тормошобоҙҙа, шөкөр, байрамдар етерлек, ләкин эш уларҙың күплегендә түгел, ә ата-бабаларыбыҙҙың онотола барған матур ғәҙәттәрен тергеҙеп, шулар нигеҙендә эскеһеҙ табындар йолаһын булдырыу. Рюмка тотоп тост әйтеү беҙҙең халыҡҡа төҫ түгел, был, ғөмүмән, дөрөҫ ғәмәл түгел. Араҡыһыҙ-ниһеҙ айыҡ аҡыл, керһеҙ күңел менән матур теләк теләү - эйе, булған бындай йола ата-бабаларыбыҙҙың йәшәү рәүешендә. Бөгөнгө халыҡты был рәүешкә нисек өйрәтергә һуң? Әйтәйек, 40 көн буйына иртән бер үк ғәмәлде башҡарырға ғәҙәтләнеү мотлаҡ хоҙлоҡҡа күсә, унан характерға әүереләсәк. Ә характер, холоҡ туранан-тура кешенең яҙмышына йоғонто яһаясаҡ. Һәр бер табын, мәжлестәрҙә (туй булһынмы ул, тыуған көнмө, өй туйлауымы һ.б.) тостарһыҙ матур теләктәр теләү ҡабатлана килһә, эскелек үҙенән үҙе онотоласаҡ. Борон бит нисек булған: ололар вәғәз рәүешендә һүҙ башлап әйткән. Мәжлестәрҙе ашап-эсеү өсөн түгел, ә йәштәргә өгөт-нәсихәт уҡыу, бер-береһе менән аралашыу, кәңәштөңәш итеү маҡсатында ла ҡорғандар. Тағы ла шуныһы мөһим: бындай үҙенсәлекле йыйын-мәжлестәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте ҙур булған. Сөнки теләк теләүсе бындай урында тик ихлас була, икейөҙлөләнә алмай, һөҙөмтәлә мәжлестә ул яратып бөтмәгән берәү булһа, ул үҙенең телмәре менән ике аралағы көсөргәнеште юҡҡа сығара, мөнәсәбәттәрҙе көйләй ала. Был үҙ сиратында кешеләрҙе кем хаҡындалыр асыу, насар уй йөрөткән хәлдә лә уны тышҡа сығармаҫҡа, сабырлыҡҡа, характер һығылмалығына, аралашыу мәҙәниәтенә өйрәтә. Былар бөтәһе лә элек булған, ләкин тормошобоҙға эскелек менән бергә тост әйтеп "төп күтәреүҙәр" башланғас та онотолған. Мәжлес, табындарҙың аралашыу, кәңәшләшеү функцияһы, шулай итеп, "һаулыҡ өсөн", "һинең өсөн", "минең өсөн" кеүегерәк мәғәнәһеҙ дөйөм һүҙҙәр әйтелә торған эске сараһына әүерелгән.

***Мәҙинә ҒИЛМИТДИНОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Мәсьәлә көн үҙәгенә бик урынлы ҡуйыла, афарин! Ошо йүнәлештә кемдер эште башлап ебәрергә тейеш ине. Ғөмүмән, "Киске Өфө"нө уҡыйым да шатланам: халыҡты, йәмәғәтселекте айыҡ тормошҡа әйҙәүҙә гәзитебеҙ маҡсатҡа йүнәлешле сәйәсәт алып бара, миңә был оҡшай. Шуға күрә лә бөгөнгө һорауығыҙға ихлас күңелдән яуап бирәм, сөнки был минең өсөн дә күптән уйланып, яуап таба алмай йөрөгән мәсьәлә.

Республикабыҙ министрлыҡтарының береһендә күп йылдар эшләү һөҙөмтәһенән сығып шуны әйтер инем: йыш ҡына урындарҙағы власть органдарында, мәҙәниәт, хатта мәғариф өлкәләрендә эшләгән хеҙмәткәрҙәр эскене үҙҙәре ойоштора. Элек тә шулай булды, хәҙер ҙә шулай. Мин нимәне күҙҙә тотоп шулай әйтәм? Миңә эшем буйынса райондарға командировкаларға йыш йөрөргә тура килде. Үҙебеҙҙең эшмәкәрлек йүнәлештәре буйынса тикшереүҙәр, ревизиялар үткәрә инек, минең менән бергә тағы бер-ике хеҙмәткәр сыға ине. Шулай етди, ҡатмарлы эш менән булғанда, тикшереүгә килгән ойошмалағы хеҙмәткәрҙәр беҙгә ярҙам итәһе урынға, тыз-быз йүгерешеп, табын хәстәрләргә керешә. Район ашханаларын үҙегеҙ беләһегеҙ, ярай, һүҙҙәрен йыҡмайыҡ, тип тамаҡ ялғарға ултырҙыңмы - өҫтәлгә йылтыр шешәләр менеп ҡунаҡлай. Шунан башлана мәжлес, тостар әйтешеү, маҡташыу... Минең менән килгән хеҙмәттәштәргә был оҡшап төшә ине, ә мин гел протест йөҙөнән табынды ташлап сығып китәм дә ҡунаҡханаға ҡайтып сәй эсә инем. Бер тапҡыр шулай беҙ килеп төшөүгә, "фәлән" районда 2-3 яҙыусы, мәҙәниәт өлкәһенән чиновниктар ҡунаҡ булып ята ине. Уларҙың ҡыланыштарын, лаяҡыл иҫерек "шағир ишараттарын" күреп, күңелем оҙаҡ әрнеп йөрөнө, урындағы халыҡтан оялып ҡайтып киттем.

Әйтергә теләгәнем шул: күп ваҡыт эште шулай эске ойоштороп, үҙебеҙ ҙә боҙабыҙ. Кемдер, эйе, эске табынын үҙен хөрмәтләү тип ҡабул итә, ә минең өсөн, мәҫәлән, кәмһетеү, минең бәҫте төшөрөү тип ҡабул итәм. Ҡасанға тиклем араҡы баш ҡаланан килгәндәрҙе хөрмәтләү эквиваленты булып хеҙмәт итер икән? Был бит, кереһенсә, ике яҡтың да аң, мәҙәни, интеллект кимәлен күрһәтеүсе билдә.

(Дауамы 2-се биттә).

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

## КҮРЕП ҠАЛЫП, КҮТӘРЕП АЛЫУСЫБЫҘ

"Киске Өфө" - иң яратҡан гәзитем, башҡа баҫмаларҙы алдырмаған хәлдә лә уға һәр ваҡыт яҙылып уҡыясаҡбыҙ, сөнки ул үҙен илһөйәр тип иҫәпләгән һәр башҡорттоң гәзите. Илһөйәрҙәр гәзите, тип әйтер инем уны. Был бәғзе баҫмалар кеүек, күҙ йөрөтөп кенә сыға һәм шуның менән онотола торғандарҙан түгел, уны ентекләп, һәр битен яйлап аҙна буйы уҡырға кәрәк.

Миңә гәзит тәҡдим иткән бөтә темалар ҙа оҡшай. Йәшәйешебеҙҙе төрлө яҡлап, киң даирәлә яҡтырта ул. Айырыуса эшҡыуарлыҡ темаһын күтәреүе маҡтауға лайыҡ. Унда ла тема дөйөм һүҙҙәрҙән, өгөт-нәсихәт биреүҙән алыҫ булыуы, ә үҙ эшен башлап, тәүге аҙымдарын яһаусы, шулай уҡ ярайһы ғына уңышҡа өлгәшкән эшҡыуарҙарҙың тәжрибәһен, проблемаларын күрһәтеүе менән ҡиммәт. "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләрҙе уҡып, мин дә эшҡыуарлыҡҡа тотоноп киттем. Әле, халҡыбыҙҙың боронғо кәсептәренең береһе - кейеҙ, бейма баҫыу менән шөғөлләнәм. Беҙҙең халыҡ үҙ эшен булдырыуға ҡыйыуыраҡ тотонһон ине, эшҡыуарҙар һаны бермә-бер артһын ине. Был йәһәттән беҙҙең башланғыстарҙы күреп алып, күтәреп ебәреүсе, дәртләндереп тороусы гәзитебеҙ - "Киске Өфө"-бөҙ бар бит эргәбеҙҙә.

**Зәкир ИШМЫРҘИН,**
**эшҡыуар.**
**Ғафури районы**
**Сәйетбаба ауылы.**



✓ *Шул саҡ йәш әсәй алдында торған араҡы ҡойолған рюмканы алып, балаһы ҡулындағы һутлы стакан менән сәкәштерҙе. Шунан һуң ғына теге бала тынысланып, ҡәнәғәт йөҙ менән һутты эсеп ҡуйҙы.*



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ТӨШЛӨК ҒҮМЕРЕҢ БУЛҺА,

## кислек мал йый…

**Был әйтемдең варианты ла бар: "Һигеҙ көн ғүмергә туғыҙ көн тырышлыҡ кәрәк". Хәҙер инде был әйтемдәрҙе төрлө юҫыҡта ҡарап, фекер ебен тағатып ҡарайыҡ.**

Был әйтемдәр бер-береһен ҡабатлаған һымаҡ тойолһа ла, уларға ҡапма-ҡаршы мәғәнә лә һалынған. Әйтәйек, тәүгеһендәге "төшлөк ғүмер"ҙе "һигеҙ көн ғүмер"гә тиңләһәк, "кислек мал" менән "туғыҙ көн тырышлыҡ" логикаһы йәбешмәй кеүек. Был хәл үҙе үк әйтемдәрҙең фекер төбөнә төшөп ҡарауҙы талап итә.

"Төшлөк ғүмерең булһа, кислек мал йый" тигәндең иң өҫтә ятҡан мәғәнәһе ғүмере самаһы "төшлөк" кенә булған кешенең үҙе үлгәндән һуң да балаларына, башҡа туғандарына ҡалыр мирасы, байлығы хаҡында һүҙ бара. Кеше үҙе өсөн генә йәшәргә тейеш түгел, үҙенән һуң ҡалғандарҙы ла, варисҭарын да ҡайғыртырға тейеш. Һәр хәлдә, кеше үҙенән һуң башҡаларға нимәлер ҡалдырырға бурыслы, балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡаҡҡа таяндырып китергә тейеш түгел. Шулай уҡ һәр кеше хатта үҙенең йыназа мәшәҡәттәрен дә үҙе күтәрергә бурыслы. Беҙҙең халыҡта уны үлемтек тиҙәр. Ә һинән тороп ҡалғаны мираҫ тип атала.

Сағыштырмаса тотош ғүмерҙең төшкә тиклем генә булған өлөшө артабанғы кискә тиклемгә ғүмерҙең ҡап яртыһын төшкил иткәнен күҙ уңында тотҡанда, кешенең туплап ҡалдырған "малы" ул тағы ла бер ғүмеренә етерлек булырға тейешлеген аңлата. Ни өсөн тигәндә, төшлөк ул көндөң ҡап уртаһы ғына. Тимәк, кеше үҙ ғүмерендә үҙе өсөн күпме йәшәһә, мал туплаһа, тағы ла бер кешенең ғүмеренә етерлек мираҫ ҡалдырырға бурыслы. Тағы ла төпкәрәк төшәйек: тимәк, кеше үҙе өсөн генә йәшәй алмай. Ә кем өсөн һин ул мираҫты ҡалдыраһың? Билдәле, балаларыңа, туғандарыңа, нәҫелдәштәреңә. Тимәк, һин үлгәндән һуң да уларҙы күпмелер ваҡыт хәстәрләп йәшәй алаһың. Сөнки улар быға мохтаж. Ә бит ошо "кислек мал туплау" шарты үтәлгән осраҡта халҡыбыҙ һәм илебеҙ ниндәй күтәрелеш кисерер ине.

Икенсенән, "мал" тигәндән был һүҙҙе тик матди байлыҡ ҡына тип тә аңларға ярамайҙыр. Мал - ул шул уҡ тормош тәжрибәһе лә, аҡыл да, рухи өлгө лә, тел дә, рух та, сәнғәт тә, мәҙәниәт тә, әҙәбиәт тә, яҡты иҫтәлек тә, ҡыҫҡаһы - барыһы ла. Мал - байлыҡ, ә байлыҡ ул - дәүләт. Тимәк, беҙ үҙебеҙҙең балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә, уларҙың үҫешен, бәхетле тормошон тәьмин итерлек дәүләт тә ҡалдырырға бурыслыбыҙ. Тимәк, һәр кем тик үҙен генә ҡайғыртмай, ил, халыҡ, милләтенең дәүләтселеге хәстәре менән дә йәшәргә бурыслы.

"Кислек мал йый" кешене ана ниндәй маҡсаттарға алып барып бәйләй. "Минән һуң хет донъяны Туфан баҫһын", тигән йәшәү принцибын да инҡар итә был әйтем. Бер яҡтан уйлағанда , ябай ғына аңлашылған кеүек, әммә уның асылына төшә башлаһаң, кешенең, шәхестең, милләт вәкиленең, ил гражданының йәшәү маҡсаты, тормош программаһы хаҡындағы фәлсәфәгә барып ялғана.

Ә инде "Һигеҙ көн ғүмергә туғыҙ көн тырышлыҡ кәрәк" тигән әйтемгә килгәндә, ул да тәүгеһенең мәғәнәһенән тулыландыра, йәғни төшлөк кенә ғүмерең булып, кислек мал йыйыр өсөн төшлөк ғүмергә кискә тиклем етерлек көсөңдө биреп йәшәргә кәрәк, тигәнгә ялғана. Бында логика бик ҡыҙыҡ ҡына: әйтәйек, мин 100 саҡрымлыҡ ергә барыр өсөн 200 саҡрымлыҡ көсөмдө,энергиямды түгергә тейеш булып сығам. Бында, беренсенән, мин нимәгәлер ирешер өсөн үҙемдең барлыҡ мөмкинлегемде һалып, ҙур тырышлыҡ күрһәтергә бурыслымын, икенсенән, алдыма ҡуйған маҡсатым икеләтә ҙур булыуы мотлаҡ. Ваҡ-төйәк, еңел-елпе ғәмәл менән йәшәүҙең дә ситен икәнлеге аңлашыла бында. Ҡыҫҡаһы, ғүмер фиҙаҡәрлеге хаҡында был әйтемдәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Әскеһеҙ туй, табын һәм йыйындарҙа ҡотлау һүҙҙәре әйтеүҙе, теләктәр теләүҙе айыҡ тормош йолаларының береһенә әйләндереү мөмкинме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Артур БАТЫРШИН, программист, йәш быуын вәкиле:*** Яңыраҡ бер мәжлестә булырға тура килде. Өҫтәлдә, әлбиттә, алкоголле эсемлектәр ҙә бар ине. Ҡаршымдараҡ бер йәш әсә ултыра, алдында ике йәштәрҙәге балаһы ултыра. Бер заман ул бала әсәһенән һут һорай башланы, әсәһе уға матур стаканға һалынған һут тотторҙо. Әммә бала стакандағы һутын эсмәйенсә, иламһырап мыжый, әсәһенә ниндәйҙер ишаралар яһай башланы. Шул саҡ йәш әсәй алдында торған араҡы ҡойолған рюмканы алып, балаһы ҡулындағы һутлы стакан менән сәкәштерҙе. Шунан һуң ғына теге бала тынысланып, ҡәнәғәт йөҙ менән һутты эсеп ҡуйҙы. Әсәһе: "Ул шулай беҙҙең менән сәкәштереп эсә шул", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Балаһының был ҡылығынан уңайһыҙланманы ла, киреһенсә, ғорурланғандай ҙа ине буғай. Мин аптырашымдан нимә әйтергә лә, быға ниндәй баһа бирергә лә белмәй ултырҙым. Был ваҡиға мине уйға һалды. "Эсеү йолалары" беҙҙең тормош-көнкүрешебеҙгә шул хәтлем ныҡ үтеп ингән. Балаларыбыҙ беҙгә ҡарап сәкәштереү, тост әйтеү, араҡы тотоп, ниндәйҙер һүҙҙәр әйтеү кеүек ғәҙәттәрҙе аңына һеңдереп үҫә. Уларҙың төпкө аңына һалыңа шул ғәҙәттәр. Аҙаҡ улар тәүҙә уйындарында, унан төрлө байрамдар билдәләгәндә шул уҡ ата-әсәһен ҡабатлай башлай. Шуның өсөн атай-әсәйҙәргә, иң алда үҙегеҙгә бала күҙлегенән ҡарағыҙ, һеҙҙең ҡылыҡ-ғәҙәттәрегеҙ балағыҙға ниндәй йоғонто яһай икәнен аңлағыҙ, ҡартлыҡтағы бәхетегеҙ йә бәхетһеҙлегегеҙ балаларығыҙҙың тәрбиәһенә бәйле икәнен бер генә минутҡа ла онотмағыҙ, тип өндәшке килә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Иғтибар итәһегеҙҙер, мөхтәрәм йәмәғәт, "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында беҙ ҡайһы саҡта яуабын таба алмай баҙатып ҡуя торған һорауҙарға яуап эҙләргә, тормошобоҙҙағы күҙгә сүп булып төшә, алға барырға кәртә булып ҡамасаулай торған мәсьәләләргә иғтибар йүнәлтергә тырышабыҙ. Шундай һорауҙарҙы беҙ һеҙҙән дә көтәбеҙ. Ә был юлы юғарыла күтәрелгән мәсьәлә буйынса бер мөрәжәғәт: әйҙәгеҙ, байрамдарыбыҙҙы, юбилейҙар, туйҙарҙы айыҡ табындар менән билдәләргә өйрәнәйек. Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы тап шундай йолаһы тота. Ҡайҙа, кемдәрҙә бар тағы шундай тәжрибә? Хәбәр итегеҙ.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Бөрө районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Май айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 5 "Көрьән -Кәрим" китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индексль һына **340 һум 92 тингә,** 50673 индексльһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йыйылышының дүртенсе саҡырылыш депутаттары БР Конституцияһының 87-се статьяһына ярашлы, республика Президентына Азамат Илемб әтовты Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры итеп тәғәйенләргә ризалыҡ бирҙе. Республика Президенты Азамат Илембәтовты Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры итеп тәғәйенләү тураһында Указ ҡабул итте.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, ЮНЕСКО эштәре буйынса БР комитеты рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина 12-15 майҙа Рәсәй делегацияһы составында Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Башҡарма советының мәғариф, фән һәм мәҙәниәт мәсьәләләренә арналған сессияһы эшендә ҡатнашты. Ике яҡлы һөйләшеүҙәрҙә донъяла танылыу яулаған "Шүлгәнташ" тәбиғи-мәҙәни комплексын, "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын, төрки халыҡтарҙың "Һабантуй" милли байрамын һәм Бөтә донъя кешелек мираҫы исемлегенә индерелеүгә лайыҡлы булған башҡа объекттарҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре тикшерелгән.

✓Константин Толкачевтың блогында "Төнгө ваҡытта граждандарҙың тыныслығын булдырыу тураһында"ғы закон проектын әүҙем тикшереү бара. Комментарийҙарҙың күбеһе закон проекты өҫтөндә эшләгәндә ҡулланыласаҡ. К. Толкачев белдереүенсә, закон ҡабул итергән алда йәмәғәт фекерен тыңлау күберәк файҙа килтерә. Был закон проекты тураһындағы фекерҙәрегеҙҙе http://kbtolkachov.livejournal.com/15805.html адресы буйынса ҡалдыра алаһығыҙ.

✓БР буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығы физик шәхестәр килеме тураһындағы һалым буйынса декларация кампанияһының һөҙөмтәләре менән халыҡты таныштыра башланы. Быйыл килем тураһындағы декларациялар 14 процентҡа күберәк булған. Йылдың дүрт айы эсендә төбәктең һалым органдарына 3-НДФЛ формаһы буйынса 124 мең декларация теркәлгән, уларҙың күп өлөшө - 2010 йылда милек һатыуҙан килем алыусы һалым түләүселәрҙән. Декларация кампанияһы ваҡытында 9,5 мең тирәһе бюджет өҫтәмәһенә һалым декларацияһы тапшырылған, был 2010 йыл менән сағыштырғанда 1,7 меңгә күберәк, уның дөйөм суммаһы 197 миллионға еткән.

✓ *Халыҡ был фронттың кемгә ҡаршы көрәшеүен бик аңлап та етмәйҙер. Әммә ул шуны яҡшы белә: ҙур ҡалъялар эләккәндә халыҡ бөтөнләй онотола, ә инде ярҙам кәрәк булғанда ул шунда уҡ иҫкә төшә.*



*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...*

**Шундай һорау биргәндә, күптәр, моғайын, аптырап ҡалыр, ә Бөйөк Ватан, Афған һуғыштары, башҡа ҡораллы низағтарҙа ҡатнашыусылар, моғайын, тертләп ҡуйыр. Сөнки фронт һүҙе уларҙың аң төпкөлөнә ҡан ҡойош, көс ҡулланыу булып инеп ултырған. Уйлап ҡараһаң, тормош үҙе яу яланы кеүек, унда параллель рәүештә нисәмә фронт бар. Бәлки, шуғалыр ҙа, май башында Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин тотто ла уларҙың һанын тағы берәүгә арттырҙы - халыҡ фронты ойошторҙо.**

# ФРОНТ ҺЫҘЫҒЫ... ҠАЙҘАН ҮТӘ?

Тарихтан күренеүенсә, халыҡ фронты барлыҡҡа килтереүҙең ике аспекты бар: сәйәси һәм хәрби. Хәрби күҙлектән ҡарағанда ла, сәйәси күҙлектән ҡарағанда ла, уның асылында бер үк нәмә - көрәш, бүленеш ята. Мәҫәлән, Граждандар һуғышы ваҡытында аҡтар менән ҡыҙылдар, Бөйөк Ватан һуғышында - фашистар менән совет ғәскәрҙәре көрәшһә, сәйәсәттә фронт һыҙығы кешеләрҙе власть өсөн көрәштә ике категорияға, ябайлаштырып әйткәндә, һайлаусылар һәм һайланыусыларға бүлә. Аңлағанһығыҙҙыр инде, тимәк, алда беҙҙе һайлауҙар баталияһы көтә...

Бер аҡыл эйәһенең: "Тотош халыҡты бер үк ысул менән ике тапҡыр алдап булмай", - тигән һүҙҙәре бар. Ысынлап та, быға тиклемге һайлауҙарҙа алданып арыған халыҡҡа хәҙер буш вәғәҙәләр биреү мөмкин түгел, шуға ла тиҙ арала ниндәйҙер яңылыҡ уйлап табыу зарурлығы килеп тыуа ла инде. Ә халыҡ нимә, партия ҡушҡан икән, һәр саҡ күтәреп алырға әҙер генә тора. Хатта әҙер булмаған хәлдә лә, уның әҙерлегән киң мәғлүмәт сараларында шундай итеп күрһәтәләр, ирекһеҙҙән, халыҡ үҙе лә шуға ышана башлай. Бына Владимир Владимирович халыҡ фронты булдырырға тигән идея әйтеүе булды, уны шунда уҡ ваҡ-ваҡ партиялар күтәреп тә алды.

Әммә, илдең социологик һорау алыу хеҙмәттәре асыҡлауынса, халыҡтың 66 проценты "Берҙәм Рәсәй" һәм Владимир Путин эргәһендә "Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты" ойошторолоуын белмәй ҙә. Билдәле, май - баҡса эштәренең ҡыҙған осоро. Былтырғы ҡоролоҡтан миктәгән электорат (һүҙ һайлауҙар тураһында барғас, электорат терминын ҡулланыу урынлыраҡтыр) бөтә иғтибарын һәм көсөн баҡса эштәренә йүнәлтте. Хәҙер иһә дүрт күҙ менән ямғыр яуғанын көтә, уныһы, хәйерһеҙең, яумай интектерә. Шулай итеп, халыҡ баҡса эштәре менән көрәшкән саҡта, элита ҡабат власть өсөн көрәш башланы.




Уйлап ҡараһаң, нәҡ реклама хәҡиҡәтте һөйләй: "Нисек кенә борғолама, барыбер Rich килеп сыға"! Ысынбарлыҡта ла, "Берҙәм Рәсәй"ҙе нисек кенә борғолама, уға ниндәй генә эйәрсәндәр таҡма, барыбер илдә бер партиялылыҡ килеп сыға. Ә ҡалғандары ҡорған өсөн генә. Ваҡ фирҡәләр, ижтимағи ойошмалар, эшселәрҙең һәм бизнестың профсоюз лидерҙары берләшеп, халыҡ фронты ҡанаты аҫтына йыйылған икән, тимәк, улар "Берҙәм Рәсәй"ҙең көсөн генә арттырасаҡ. Ә "фронтовиктар"ҙың киләсәге ниндәй буласаҡ? Тарихҡа мөрәжәғәт итһәк, кәрәктәре бөтөү менән халыҡ фронты тарҡатыласаҡ, кемдер ҡалъялы киҫәк эләктереп ҡаласаҡ, кемдер...

Премьер фронттың ойошторолоуын граждан йәмғиәтенең яңы идеялары ҡалҡып сыҡһын, яңы лидерҙар барлыҡҡа килһен өсөн булдырыла, тип аңлата. Әлбиттә, Рәсәйебеҙгә яңы идеялар ҙа, яңы лидерҙар ҙа бик кәрәк. Әммә барыбер ҙә иҫке нигеҙгә яңы йорт һалырға тырышҡан кеүек фекер ҡалдыра был белдереү. Сөнки яңы идея, яңы фекер, яңы ҡараш өсөн тап яңыса фекерләгән кешеләрҙең булыуы мотлаҡ, ә тормошҡа ҡарашы, күҙаллауҙары совет заманынан эйәреп килгән, йәғни асылы шул уҡ ҡалған, әммә атамаһы ғына үҙгәргән йәмғиәттән, шунда йәшәгән халыҡтан нимә көтөргә мөмкин? Рекламалағы кеүек, бер партиялылыҡты нисек кенә итеп борғолап, нисек кенә атаһаҡ та, уның еҫеме барыбер шул килеш ҡаласағы көн кеүек асыҡ бит. "Ысынбарлыҡта халыҡ фронты - ысынлап та, һайлау технологияһы. Премьер былай ҙа һайлауҙарҙа еңер ине, әммә халыҡ фронты менән ышаныслыраҡ", - тип яҙа "Новая газета" күҙәтеүсеһе Андрей Колесников. Шулай булмауы мөмкин дә түгел, сөнки халыҡ фронты, исеме үк әйтеп тороуынса, халыҡ исеменән тулы тауышҡа ғариза бирә, ә халыҡ ихтыярын үтәмәй ҡара. Бер ыңғай ике ҡуян атыла - власть та ҡулда, халыҡ ихтыяры ла ҡәнәғәтләндерелә.

Эйе, теория буйынса, бөгөн халыҡ фронты власть өсөн көрәшергә тейеш, әммә ғәмәлдә фронт һыҙығының ике яғында халыҡтың ике яҡҡа бүленгән категорияһы торасаҡ: бер яҡта, ысынлап та, үҙ ҡалъяһын эләктереп ҡалырға теләүселәр, икенсе яҡта демократия уйынында ҡатнашырға теләмәгән, үҙ фекере, үҙ һүҙе булған, иле, ере, теле, рухы өсөн көрәшеп, ысын фронт һыҙығын йөрәге, күңеле аша үткәргән халыҡ. Шуға күрә интернетта төрлө фекерҙәр күренә. Әлбиттә, КПРФ-тың был идеяны тәнҡитләүе аңлашыла, сөнки "Берҙәм Рәсәй" уға альтернатива булараҡ ойошторолдо. Тағы кемдәрҙер яңы булдырылған "фронт"ҡа ҡаршы Милли ҡотолоу комитеты ойошторорға кәрәк, тигән фекер ташлай: "Фронт ойошторолоуҙың факты үҙе үк властың көсһеҙләнеүен күрһәтә, тимәк, һайлауҙарҙа тауыштарҙы үҙҙәре теләгәнсә үҙгәртә алыуҙарына ышанмайҙар". Власть, киреһенсә, халыҡ аңламаны, тип, бөтөн ғәйепте аҫтағыларға төшөрмәксе. Ысынлап та, халыҡ был фронттың кемгә ҡаршы көрәшеүен бик аңлап та етмәйҙер. Әммә ул шуны яҡшы белә: ҙур ҡалъялар эләккәндә халыҡ бөтөнләй онотола, ә инде ярҙам кәрәк булғанда ул шунда уҡ иҫкә төшә. Халыҡ вәкилдәренең "Сәйәсәттә халыҡ өсөн бер нәмә лә эшләнмәй, барыһы ла халыҡҡа ҡаршы алып барыла", тиеүендә лә ниндәйҙер кимәлдә хаҡлыҡ бар. Әммә беҙҙә тура әйткән туғанына ярамай, шуға телеңде арҡыры тешләп тороуың хәйерлерәк...

**ШУЛАЙ ҘА...**

**Халыҡ фронты барлыҡҡа килеүен ил етәкселәре яһаған мәжбүри аҙым, объектив күренеш тип баһаларға кәрәктер. Власть халыҡтан ни тиклем генә алыҫлашырға теләмәһен, һайлауҙар алдынан ул барыбер халыҡҡа таянырға мәжбүр. Башҡаса юлы юҡ уның. Икенсенән, был фронттың барлыҡҡа килеүе "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһенең халыҡ һәм власть фирҡәһе кимәленә күтәрелә алмауы хаҡында ла һөйләй. Өсөнсөнән, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында ҡаралғанса, беҙҙең илдә власть илдең күп милләтле халҡы ҡулында бит. Тимәк, халыҡтың власҡа хоҡуғы һайлау алдынан булһа ла тәьмин ителә тигән һүҙ был. Тик халыҡ ярҙамында власҡа килеүселәр һайлау үткәндән һуң үҙенә ярҙам итеүселәрҙе генә онотмаһын ине. Халыҡ фронты - халыҡ власы ярҙамында халыҡ хоҡуғын бойомға ашырыусы механизм да.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ЙӘНЛЕК ӘСӘЙҘӘР ҺӘМ...
### кеше әсәйҙәр

**Бөгөнгө заманда етем балалар күплегенә иҫтәр китерлек. Замана ата-әсәләре балаларын ҡарауҙан, тәрбиәләүҙән ситләшә йә ситләштерелә...**

Ике яҡ күршеләремдең дә кәзәләре бар. Бер көн шулай һул яҡ күршемдең кәзәләре бәрәстәрен эйәртеп йылға буйына төшөп бара. Ә уң яҡ күршенең кәзәһе ҡояшҡа йылынып, бер ни белмәй йоҡлап ятҡан бәрәсе эргәһендә урала. Күршенең кәзәләренә эйәрергә булғандыр инде, бына ул балаһын алғы тояғы менән тырнай, уятырға итә, ләкин тегеһе уянмай. Ахыры, кәзә бәрәстең башына тояғы менән ҡатыраҡ итеп типкәндәй итте һәм бәрәс уянды. Шунан улар ҙа теге кәзәләр артынан сапты. Кәзә бәрәстәре әсәләре менән бергә тауҙа рәхәтләнеп һикерешеп уйнаны.

Беҙҙең бесәйебеҙҙең өс балаһы бар. Береһе малай, икеһе ҡыҙ. Бер көн бесәй һунарҙа йөрөп килде лә балаларын имеҙергә ятты. Малай бесәй теге ике ҡыҙға имергә бирмәй. Шул ваҡыт әсәһе түҙмәне, асыуланып, малай бесәйҙе тешләп икенсе бүлмәгә алып һалып китте. Теге ике мыяуҡайын туйҙырғас, малай бесәйҙе кире тешләп алып килде һәм үҙенең эргәһенә өсәүһен дә һалып, әсә бесәй рәхәтләнеп йоҡлап китте.

Ошо йәнлек әсәйҙәрҙе күҙәтеп, уларҙы бөгөнгө ата-әсәләр менән сағыштырып, аптырап ултырыуым...

**Бәширә УСМАНОВА.**
**Әбйәлил районы Буранғол ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Бөрйән районы муниципаль район Советы ултырышында Ирек Зарипов, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, хакимиәт башлығы вазифаһынан бушатылды. Был вазифаны башҡарыуҙы депутаттар Динир Әхмәтйәновҡа йөкмәтте.

✓ Киләһе аҙнала Өфөлә "Ҙур химия" халыҡ-ара форумы эшләй башлаясаҡ. Оло йыйынға бөтә донъянан белгестәр киләсәк, унда тармаҡҡа ҡағылған көнүҙәк проблемалар ҡараласаҡ.

✓ "Ирәмәл" тәбиғи паркы биләмәһендә янғын сығыу һөҙөмтәһендә ете гаерҙе ут ялмаған. Айырыуса урман менән ҡапланмаған ер нығ янған. Республиканың урман хужалығына килтерелгән зыян күләме иҫәпләнә. Янғын сығыу сәбәбе билдәле түгел.

✓ Яңыраҡ Анталияла дәүләт театрҙарының II халыҡ-ара фестивале асылды. Ул 28 майға тиклем дауам итәсәк. Сара сиктәрендә "Төрксой" ағзалары иҫәпләнгән илдәрҙең милли, дәүләт академия драма театрҙары директорҙары ултырышы үтәсәк. Унда Башҡортостандан да вәкилдәр ҡатнашыуы көтөлә. БР Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был сараға М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры, РФ һәм БР-ҙың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев саҡырылған.

✓ 27-28 майҙа Октябрьский ҡалаһында 11-се республика Ҡурай байрамы үтә. Байрамда 200-ләп ҡурайсы ҡатнаша тип көтөлә. 28 майҙа ҡала майҙанында бәйгелә еңеүселәрҙе ҡотлап, театрлаштырылған тамаша ойоштороласаҡ.

✓ Республикала социаль аҙыҡ-түлектең хаҡын, уның сифатын контролдә тотоу, баҙарҙарҙа урында етештерелгән һәм ситтән килтерелгән аҙыҡтың нисбәте, был өлкәләге контролде арттырыуҙың актуаллеге - был мәсьәләләр БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҡарары менән булдырылған, аҙыҡ-түлек баҙарындағы хәлгә мониторинг үткәреү өсөн махсус төҙөлгән эшсе төркөмдөң сираттағы ултырышында тикшерелде. Ултырышта урындағы етештереүселәргә конкурентлыҡ өлкәһе булдырыу, уларҙың продукцияһын - махсус баҙарҙарҙарҙа, ауылда етештерелгән аҙыҡ-түлекте урынында уҡ һатып алыуҙы ойоштороу, сифатһыҙ аҙыҡ-түлек хаҡындағы мәғлүмәттең асыҡ булыуы кеүек проблемалар күтәрелде.

*✓ Барлыҡ көйәрмәндәрҙең яратҡан уйынсыһы Александр Радулов, Өфө командаһында 2014 йылдың апреленә тиклем уйнаясағын белдереп, контрактын оҙайтты.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТИМЕР АҠСАНДЫ...

## йәлләмәйенсә ҡуллан

**Башҡортостан Республикаһының Милли банкыһы рәйесе урынбаҫары Ғәббәс Әхмәтшин белдереүенсә, Башҡортостанда ун һумлыҡ ҡағыҙ банкноталарҙы тимер аҡсаға алыштырыу был номиналдағы аҡса билдәләренең ҡытлығына килтергән.**

-Әйләнештән күпме аҡса алына, шул күләмдә үк яңылары сығарыла, шуға күрә республикала 10 һумлыҡ тимер аҡсалар етерлек булырға тейеш, - ти Ғәббәс Әхмәтшин. - Тик был аҡсаларҙың бер өлөшө "эшләмәй", ә халыҡта һаҡлана.

Ун һумлыҡ тимер аҡсалар араһында төрлө иҫтәлекле датаға арналып сығарылғандары күп булыуы һөҙөмтәһендә улар тиҙ арала нумизматтар ҡулына эләгә. Етмәһә, был номиналдағы аҡсалар башлыса йәмәғәт транспортында, ваҡ сауҙа нөктәләрендә тарала һәм кире кредит ойошмалары кассаларына әйләнеп ҡайтмай. Шуға ла Милли банкы халыҡҡа унар һумлыҡ тимер аҡсаларҙы бөтә төр түләүҙәр өсөн тотонорға саҡыра. Кредит ойошмаларына иһә бер ниндәй сикләүһеҙ халыҡтан ваҡ аҡсаны алырға, һорау булғанда ваҡ аҡсаны эреләтеп бирергә тигән йөкләмә ҡуйылған. Күрелгән был саралар һөҙөмтәһендә көҙгә тиклем 10 һумлыҡтарҙың етешмәү проблемаһы хәл ителәсәк.

1 һәм 5 тинлек тимер аҡсаларҙы маҡсатлы ҡулланыу мәсьәләһе лә асыҡ ҡала. Рәсәй банкыһы был номиналдағы аҡсаларҙы ҡулланыуҙан алырға тәҡдим итә. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, рәсәйлеләрҙең 80 проценты тирәһе ошо уҡ фекерҙә ҡала.

-Һәр аҡсаның үҙенең тауары булырға тейеш - шул саҡта ғына уның ҡиммәте буласаҡ. Әгәр ҙә совет заманында автоматтан бер тингә бер стакан газлы һыу алып эсеп, бер ҡап шырпы һатып алып булһа, бөгөн бер тинлек тауарҙар юҡ, - тип быға үҙ ҡарашын белдерҙе Ғәббәс Әхмәтшин.

1 тинлек аҡса һуғыу дәүләткә 47 тингә төшә, 5 тинлек аҡсаны эшләү 69 тингә барып баҫа. Әммә аҡса әйләнешенән был номиналдағы тимер аҡсаларҙы алып ташлауҙы Рәсәй банкыһы үҙ аллы хәл итә алмай. Был мәсьәләне хәл итеү буйынса федераль закон проекты Дәүләт Думаһына 2008 йылда уҡ тапшырылған. Проект авторҙары ҡулаҡса менән түләүҙәрҙә 5 тингә тиклемге тиндәрҙе һанамаҫҡа, ә 5 тиндән күберәк булғанда 10 тингә тиклем түңәрәкләргә тәҡдим итә. Ҡулаҡсаһыҙ түләүҙәр шул көйө ҡала. Шул рәүешле тауарҙаға хаҡ һәм хеҙмәттәргә тариф үҙгәрешһеҙ ҡала. Әлеге ваҡытта РФ Дәүләт Думаһының финанс баҙар буйынса комитеты Рәсәй банкыһының 1 тинлектәрҙе башҡа баҫмаҫҡа тигән тәҡдимен хупланы. Әммә был 1 тинлек аҡса әйләнештән сыға, тигәнде аңлатмай. Ә биш тинлек тимер аҡса мәсьәләһе әлегә хәл ителмәгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙӘШ МУЗЫКАНТТАР ЕҢЕҮЕ

**Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының "Өфө фанфарҙары" тип аталған тынлы оркестры Мәскәүҙә үткән "Алтын лира - 2011" балалар һәм үҫмерҙәр классик сәнғәте халыҡ-ара фестиваленең Гран-приһын яуланы. Йәш музыканттар "Инструменталь башҡарыу" номинацияһында иң яҡшылары тип табылған.**

Билдәле музыканттар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, П.И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы һәм Гнесиндар исемендәге музыка академияһы уҡытыусыларынан торған абруйлы жюри иғтибарына коллектив Хачатурян, Римский-Корсаков, Бадельт әҫәрҙәренән торған программа тәҡдим иткән. "Инструменталь башҡарыу" номинацияһына Рәсәй, БДБ һәм башҡа илдәрҙән 20-нән ашыу инструменталь, халыҡ, тынлы инструменттар, джаз оркестрҙары һәм ансамблдәре, вокаль-инструменталь ансамблдәр сығыш яһаған. Оркестрҙың етәксеһе, РФ-ның алдынғы мәғариф хеҙмәткәре Фәнзирә Ниғмәтйәнова әйтеүенсә, Башҡортостан командаһы өсөн Мәскәү, Якутия, Владимир өлкәһе, Мари Эль республикаһы музыканттары төп конкурент булып торған. Уҡыу йортоноң директоры Эльмира Сафина билдәләүенсә, был еңеү гимназия оркестры өсөн беренсеһе булмаһа ла, әлегә йәш музыканттар халыҡ-ара кимәлдә Гран-при яулағаны булмаған.



# САЛАУАТТАР ТАНТАНАҺЫ

**18 май Өфө ҡалаһында Континенталь хоккей лигаһының 2010-2011 йылдар уйын сезонында Гагарин кубогын яулаусы "Салауат Юлаев" хоккей командаһына алтын миҙалдар тапшырыу тантанаһы үтте. Юлаевсыларҙы ҡотларға республика Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй хоккей федерацияһы рәйесе Владислав Третьяк һәм меңәрләгән хоккей көйәрмәндәре килде.**

"Салауат Юлаев"ҡа еңеү килтергән көндән һуң командала үҙгәрештәр ҙә булды. Уларҙың иң ҙуры, әлбиттә, тренерҙар составына ҡағыла. Вячеслав Быков һәм Игорь Захаркиндың клуб менән контракттары тамамланыу сәбәпле, команданы артабан "Салауат Юлаев"ты 2008 йылда Рәсәй чемпионы исеменә алып килгән Сергей Михалев етәкләүе мөмкин, ләкин уның менән әлегә контракт төҙөлмәгән. Шуға күрә был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәтте клуб етәкселеге май аҙағында еткерәсәк тип көтөлә. Үҙгәрештәр шулай уҡ команда составына ла ҡағылды. Атап әйткәндә, бер-нисә сезон юлаевсылар ҡапҡаһын һаҡлаған Александр Еременко "Салауат Юлаев" командаһы менән контрактын өҙҙө. Барлыҡ көйәрмәндәрҙең яратҡан уйынсыһы Александр Радулов иһә, Өфө командаһында 2014 йылдың апреленә тиклем уйнаясағын белдереп, контрактын оҙайтты. Шулай уҡ команданың иң яҡшы һаҡсыларының береһе Максим Кондратьев та "Салауат Юлаев" менән тағы ике йылға контракт төҙөнө. Башҡа уйынсыларға килгәндә, "Салауат Юлаев" хоккей клубы әлегә был хаҡта мәғлүмәт бирмәй. Тик нисек кенә булмаһын, команданың көслө уйынсылар составы артабанғы сезондарҙа ла үҙгәрешһеҙ ҡалыр һәм артабан да беҙҙе ҡыуандырыр тип ышанғы килә.

"Салауат Юлаев" хоккей командаһы идаралығында ла яңы тәғәйенләүҙәр: Николай Курапов урынына идаралыҡ президенты-рәйесе итеп республика Президенты хакимиәте етәксеһе Әнүәр Мәхмүтов тәғәйенләнде. Клуб етәкселеге составында бер ниндәй үҙгәрештәр булманы һәм клубтың генераль директоры булып Рыбинский Вадим Александрович ҡала, ә генераль менеджеры вазифаһын Гросс Олег Иоганесович башҡара. Хоккей командаһының генераль спонсоры әүәлгесә - "Урал" мәрхәмәтлек фонды.

# ЭШҺЕҘҘӘР КӘМЕЙ, ТИҘӘР

**"Башинформ" агентлығында Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында матбуғат конференцияһы булып үтте.**

Идаралыҡ етәксеһе Тимерхан Сабит улы Биккинин белдереүенсә, ағымдағы йылдың 1 майына Башҡортостанда барлығы 38395 кеше эшһеҙлек буйынса иҫәптә тора. Шуларҙың 58 проценты - ҡатын-ҡыҙ, 42 проценты - ирҙәр, 24 проценты - 16-29 йәшкә тиклемге йәштәр, 10 проценты - оло йәштәгеләр һәм 6,5 проценты - инвалидтар. Шулай уҡ икенсе статистикаға күҙ һалһаҡ, дөйөм һандың 47 процентын үҙ теләге менән эштән киткәндәр, 24 процентын ойошма бөтөрөлөү сәбәпле йәки ҡыҫҡартыуға эләккәндәр тәшкил итә. Ошо уҡ 1 майға теркәлгән эшһеҙҙәр һаны республикала иҡтисади әүҙем халыҡтың 1,89 процентын тәшкил итә. Был һан Өфө ҡалаһында - 1,88 процент, ҡалаларҙа - 1,79 процент, райондарҙа - 2,05 процент. Бөгөнгө көнгә эшһеҙлек буйынса айырыуса көсөргәнешле хәл Ағиҙел (9,39 процент), Межгорье (3,76) ҡалаларында, Өфө ҡалаһының Ленин районында (2,45), Архангель (3,66), Шаран (3,53) һәм Аҫҡын (3,42) райондарында күҙәтелә.

Йыл башынан алып Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы ярҙамында республикала барлығы 25,3 мең кеше эш урыны тапҡан. Был күрһәткес айырыуса Өфө ҡалаһының Калинин районында, Нефтекама, Белорет ҡалаларында һәм Стәрлебаш, Йәрмәкәй, Миәкә райондарында юғары.

2011 йылдың 1 майына республиканың төрлө ойошмалары һәм предприятиелары тарафынан Идаралыҡҡа 32464 вакансия барлығы хаҡында хәбәр ителгән. Көсөргәнешлек коэффициенты (хеҙмәт идаралығында иҫәптә торған һәм бер вакантлы урынға дәғүә итеүселәр һаны) республика буйынса дөйөм алғанда 1,2, шул иҫәптән ҡалаларҙа - 1,1, райондарҙа - 1,8 һәм Өфө ҡалаһында - 0,9.

Шуны билдәләп үтергә кәрәк, 2010 йыл менән сағыштырғанда быйыл республикала эшһеҙлек буйынса иҫәпкә тороусылар һаны кәмегән.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓21 майҙан "Айыҡ ауыл" республика конкурсы сиктәрендә Себер федераль университеты профессоры Виктор Кривоногов ауыл-ҡасабаларҙа семинар үткәрәсәк. Сараны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте ойоштора. Семинар 21 майҙа Учалы районы Сөләймән ауылында башлана. 22 майҙа - Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында, Баймаҡ районы Темәс һәм Буранбай ауылдарында, 23-өндә - Йылайыр, Иҫәнғол (Ейәнсура), Мораҡ (Күгәрсен) ауылдарында, 24-ендә - Күмертау, Мәләүез ҡалаларында, Ермолаево ҡасабаһында (Көйөргәҙе), 25-ендә -Федоровка һәм Стәрлебаш райондарында, Ғафури районының Сәйетбаба ауылында, 26-һында - Салауат, Ишембай ҡалаларында, Мораҙым (Ауырғазы) ауылында буласаҡ.

✓Матбуғат баҫмаларына яҙылыу һәм таратыу йүнәлешендә эшләүсе "Пресс-сервис" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте үткән аҙнала Мәләүез ҡалаһында республиканың башҡорт телендә нәшер ителгән гәзиттәре һәм журналдары хеҙмәткәрҙәре менән уҡыусыларҙың осрашыуын үткәрҙе. "Пресс-сервис" ҡала һәм район биләмәһендә матбуғат баҫмаларын таратыусы альтернатив ойошма булараҡ барлыҡҡа килгән. Коллектив гәзит-журналдар редакциялары менән килешеү нигеҙендә эшләй. Тәүге тәжрибә һөҙөмтәле генә, "Пресс-сервис" халыҡ араһында ышаныс яулай бара.

✓Баш ҡала мәктәптәре яңы уҡыу йылына беренсе класҡа 11,2 меңдән ашыу бала ҡабул итәсәк. Әле ата-әсәләрҙән 9,6 мең ғариза ҡабул ителгән. Быйыл Өфөнөң туғыҙынсы класты тамамлаусы 8,9 мең уҡыусыһы һәм ун беренсе класты тамамлаусы алты мең уҡыусыһы йомғаҡлау аттестацияһы үтәсәк. Ҡала биләмәһендә Берҙәм дәүләт имтиханы үткәреү өсөн 31 пункт булдырылған. Имтихандар үткәреүгә 2 меңдән ашыу уҡытыусы йәлеп ителәсәк. Быйыл мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырау тантаналары 25 майҙа үтәсәк.

✓Башҡортостандың күп кенә ҡалалары, шул иҫәптән Өфө урамдарында ла ҡала юлдарының соҡорға әйләгән урындарын өлөшләтә ремонтлау бара. Мәҫәлән, Октябрьский юлсылары көндөң матур тороуы менән файҙаланып, көн һайын 200-220 тонна асфальт түшәп өлгөрә. Бының өсөн 12 берәмек махсус техника бүленгән.

*✓ Салауат һәм Саҡмағош районы батырҙары бер-береһен күтәреп һуға алмай оҙаҡ йөрөнө. Ниһәйәт, таҫтамалдарын билдәренә бәйләне былар: ике батыр бер-береһен ауҙара алмаһа, ғәҙәттә, шулай итәләр...*

БИЛ БИРМӘҪ БАТЫРҘАР

# ГЕЛ ЕҢГӘНДӘР - ТЫНЫСЛАНА,

## еңелгәндәр сәмләнә

**Иҙәнгә түшәлгән ҙур майҙанлы һары мат өҫтөндә уң ҡулдарына таҫтамал урап тотҡан ике егет баҫып тора. Яндарында улар кеүек үк олпат кәүҙәле, ап-аҡ костюм кейгән олораҡ ир баҫҡан. Бөйөк Еңеүгә 66 йыл тулыуға арналған милли көрәш буйынса ярыш бара бында. Башҡортостандың төрлө тарафтарынан иң көслө көрәшсе егеттәр Өфөгә йыйылған.**



Ике егет бына-бына бер-береһен өҙгөләрҙәй ике арыҫлан инде ҡарап торһаң: тыныс та, шул уҡ ваҡытта хәтәр ҙә улар. Башҡортостан чемпиондары титулын күп тапҡырҙар яулаған үҙҙәре. Өсөнсө уҙаман - уларҙың башлығы, йәғни алыштың судьяһы, көрәш ҡағиҙәләре теүәл үтәлһен өсөн тәғәйенләнгән. Барыһы ла хөкөмдар әфәнденең бойороғон көтә: ике арыҫлан да, уларҙы ҡарап тороусы башҡалар ҙа. Фатиха-бойороҡ яңғырағандан һуң, был ажар егеттәр хәрәкәткә килде: таҫтамалдарының икенсе яҡ осон дәғүәсе биле аша һалырға тырышып, ҡапма-ҡаршы баҫҡан килеш, яурындары менән терәлешеп, алпан-толпан атлап, түңәрәк яһап, йөрөй башланылар. Алыптай кәүҙәләренә ҡарағанда, һәр береһе 85-90 килограмм самаһы ғына барҙыр, тигән һығымтаға киләм. Кәүҙәгә бейегерәк егет таҫтамалын үҙенән ярты башҡа тәпәшерәк, әммә ҡалынығраҡ, тығыҙыраҡ егеттең биле аша уратып тотоуға өлгәште, ниһайәт. Оҙаҡламай тегеһе лә үҙ таҫтамалы ҡойороғон "дошманының" арҡаһы аша оҫта ғына эләктерә һалып алды. Ныҡ итеп алға эйелгән килеш, бер секундҡа ҡатып ҡалдылар ҙа, икеһе бер тере йән кеүек, ҡапыл хәрәкәткә килделәр. Өйөрөлгән ыңғайға футболкаларының арҡа өлөшөндә баҫылған эре, матур яҙыуҙарҙы уҡып өлгөрҙөм. Тәүгеһенең арҡаһына Башҡорт дәүләт аграр университетының аббревиатураһы (БГАУ), икенсеһенекенә республика өсөн күп тапҡырҙар сығыш яһауы тураһында һөйләгән "Башҡортостан" яҙыуы һәм ете тажлы ҡурай - Дәүләт символикаһы төшөрөлгән. Аграр университет исеменән сығыш яһаусы Азат Ғәзизовтың сығышы менән Салауат районы егете булыуын, әле был уҡыу йортоноң агрономия факультетының 4-се курсында уҡыуын ярыштан һуң үҙе менән танышҡас ҡына белдем. Был алыштары алдынан икеһе лә 6-шар дәғүәсеһен еңгәйне, бер аҙ арығандары ла һиҙелә. Йөрөй-йөрөйҙәр ҙә, береһе артҡа ҡайҡая биреберәк икенсеһен күтәрә бирә лә, ауып китәләр. Судья бойороғо буйынса түңәрәктең уртаһына йәнә килеп, тағы ла айҡашыуҙы дауам итәләр. Көрәшселәрҙең бер-береһен еңә алмай был тиклем ауыр алышыуын тәү тапҡыр күреүемдер, моғайын. Башҡортостан батырҙары исемен йөрөтөргә хаҡлы ике егет - Салауат һәм Саҡмағош районы батырҙары бер-береһен күтәреп һуға алмай оҙаҡ йөрөнө. Ниһәйәт, таҫтамалдарын билдәренә бәйләне былар: ике батыр бер-береһен ауҙара алмаһа, ғәҙәттә, шулай итәләр...

Үҙ районында производство практикаһы үтеүсе Азат, иртәгә - ярыш, тигән көндө кис кенә Өфөгә килде. Ҡасандыр Салауат районы мәктәптәре араһында көрәш буйынса гел беренсе урындарҙы яулай ине ул. "Баш ҡалала уға ҡаршы тора алырҙай батырҙар юҡ икән", - тип уйлап, яңылыша күрмәгеҙ берүк. Төп дәғүәсеһе - баҫҡан ерендә имән һымаҡ ныҡ тороусы көрәшсе Исламов бар: еңел генә ырғытырмын тимә! Ярыш башланғас та үҙенә ҡаршы сыҡҡан батыр егеттәрҙең икәүһен "тап-таҙа" алып һелтәгән Ғәзизовҡа бирешмәне бит Рөстәм Исламов: хатта уны тегеләй ҙә былай әйләндереп-тулғандырҙы, төрлө хәйләкәр алымдары менән албырғатты!

Исламов-Ғәзизов көрәшеүен ентекләп күҙәтеп тороусылар шундай хәлдәрҙең шаһиты булды: төптән "ҡалын" Исламов унан аҙ ғына "йоҡараҡ", әммә уның кеүек үк ныҡлы имән Ғәзизовты ҡушаҡ бәйләп көрәшеп, еңде барыбер. Шулай ҙа, быға тиклемге алыштарҙағы "таҙа" алып ташлауҙар, штрафтар һанын иҫәпкә алып, Азат Ғәзизовҡа 1-се, Рөстәм Исламовҡа 2-се урын бирҙеләр. Сөнки мәрәйҙәрҙе иҫәплəгәс, Ғәзизовтың "таҙа" алып ташлауҙары Исламовтыҡына ҡарағанда күберәк, ә штрафтары аҙыраҡ булып сыҡты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был ярыштан һуң Азат шундай һығымтаға килде: көҙ айҙарының береһендә Рәсәй чемпионатына һайлап алыу ярыштарына тағы ла нығыраҡ әҙерләнәсәк. Уның фекеренсә, ҙур уңыштарға өлгәшеү өсөн үҙ ваҡытында еңелеүҙәрҙе лә татып ҡарарға кәрәк. Еңелеүҙең ни икәнен онотҡан спортсыларҙы уларҙан ҡасандыр еңелгән дәғүәселәре уҙып китеүсән. Ундайҙарҙы ойоу ҡурҡынысы һағалай. "Ярышта гел генә еңеүсе - тыныслана, ә бер тапҡыр еңелеүсе - сәмләнә бит ул", - ти, республика чемпионы. Хаҡ һүҙҙәр бит!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## ҺОРАУ - ЯУАП

### ХОҠУҒЫ ЮҠ

**Өсөнсө төркөм инвалидымын, эшләмәйем. Беренсе төркөм инвалиды булған улымды ҡарау буйынса үҙемә пособие юллай аламмы?**

- Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән бер ерҙә лә эшләмәгән хеҙмәткә һәләтле кешеләргә хеҙмәткә һәләте булмаған граждандарҙы ҡарағаны өсөн айлыҡ компенсация түләүҙәрен ғәмәлгә ашырыусы ҡағиҙәләргә ярашлы, айлыҡ компенсация түләүенә бер ҡайҙа ла эшләмәгән, пенсия ла, эшһеҙлек буйынса пособие ла алмаған хеҙмәткә яраҡлы кешеләр хоҡуҡлы. Хат авторы үҙе инвалид булараҡ пенсия ала, шунлыҡтан айлыҡ компенсация түләүе юлларға уның хоҡуғы юҡ.

### КЕМ ЯУАПЛЫ?

**Өфөнөң Набережная урамындағы "Алишех" клиникаһында урологта дауаландым. Бик күп аҡса түләтәләр, ә дауаланыуҙың бер файҙаһы ла юҡ. Бер йылдан тағы килерһең, тинеләр. Бындай клиникалар эшмәкәрлеген берәй тикшереүсе бар микән?**

- Шәхси медицина клиникаларын уларға медицина эшмәкәрлеге алып барыу өсөн лицензия биргән орган контролдә тоторға тейеш. Был йүнәлештә бер нисә федераль закон эшләй: "Айырым төр эшмәкәрлекте лицензиялау", "Дәүләт һәм муниципаль контролде бойомға ашырғанда юридик шәхестәр һәм шәхси эшҡыуарҙар хоҡуғын яҡлау тураһында", "Медицина эшмәкәрлеген лицензиялау тураһында Положениены раҫлау хаҡында".

"Алишех" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт эшмәкәрлеген был хаҡта һеҙҙән БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығына яҙма мөрәжәғәт булған осраҡта тикшереү мөмкин буласаҡ.

### ПОЧЕТЛЫ ДОНОР

**Донорлыҡ хоҡуҡтарын нисек ғәмәлгә индерергә? Әсәйем 40 йыл буйы донор булып торһа ла, "Рәсәйҙең почетлы доноры" таныҡтмаһын ала алмай, сөнки ҡан тапшырыуы тураһындағы ҡағыҙ-белешмәләрен юғалтҡан. Был мәғлүмәттәрҙе ҡайҙан алырға була?**

- Ҡан һәм плазма тапшырыу тураһындағы мәғлүмәттәрҙе ҡан тапшырған учреждениеға мөрәжәғәт итеп, ҡулға алғас, был белешмәләрҙе дәүләт һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы - Республика ҡан тапшырыу станцияһы - Берҙәм донорлыҡ үҙәгенә алып барырға. Уның адресы: Өфө ҡалаһы. Батыр урамы, 41/1, телефондар: 2554257, 255-53-66; электрон адрес - rspk@ufanet.ru.

### ТРАНСПОРТ ҺАЛЫМЫ

**Автомобиль минең 83 йәшлек ҡатыным исемендә, ләкин уның менән улыбыҙ файҙалана. Ҡатыным исеменә даими рәүештә транспорт һалымы түләүҙе талап иткән ҡағыҙ килә. Был дөрөҫмө?**

- Эйе. Рәсми рәүештә кем автомобиль хужаһы тип яҙылған, машина менән бәйле бөтә яуаплылыҡ һәм түләүҙәр уның өҫтөнә йөкмәтелә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Сама белегеҙ



**Әгәр ҙә дарыу үләндәрен бер-береһенә ҡушырға яраймы, ярамаймы икәнен белмәһәгеҙ, һәр береһен айырым ҡулланығыҙ. Бер үлән икенсеһенең көсөн бөтөрөргә, йәки кәрәк һөҙөмтә урынына икенсеһен биреүе ихтимал. Шуға ла үләндәр эсер алдынан табип менән кәңәшләшегеҙ.**

Бөтнөк менән мәтрүшкәне әҙләп һалып төнәтеп эсһәң, тынысландыра, ә күберәк һалып төнәтһәң, организмды уятып ебәрә, тонусты күтәрә. Шулай уҡ ҡайһы бер төнәтмәләрҙе ашар алдынан эсһәң, тонус күтәрелә, ашағандан һуң шул уҡ дозала булһа ла, тынысландыра.

Шулай уҡ төнәтмәне йылы йәки һыуыҡ итеп эсеү ҙә төрлө һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, репешок үләнен ашҡаҙан һуты юғары булғанда йылы көйө, ә түбән саҡта һалҡын итеп һәм бер нисә тамсы лимон һуты ҡушып эсергә кәрәк.

Көнкүрештә киң ҡулланылған мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, ер еләге япрағы, ҡарағат япрағы, бәпкә үләнен бергә ҡушып эсергә ярай. Яҙ етеү менән ҡарағаттың артыҡ ботаҡтарын киҫеп ташлаған саҡта уның япраҡтарын йыйып алырға була. Май айында йыйып киптерелгән ҡарағат япраҡтары иммунитетты яҡшырта.

### Алоэ

Ҡурылдай (бронх) астмаһы башланып ҡына торған сағында алоэ менән дауаларға була. Өс йыл буйы үҫтерелгән алоэны 1 аҙна һыу һипмәй тотҡас, ҡырҡып алығыҙ һәм төрөп (полиэтиленға төрмәҫкә), һыуытҡыста өс көн тоторға. Сайҡатып, ит турағыстан үткәргәс, ярты литр балды ҡушып болғатырға һәм 10 көнгә ҡараңғы урынға ултыртырға. Май айында йыйылған бал булһа, бигерәк яҡшы. Аҙаҡтан төнәтмәне ҙурыраҡ һауыттағы йылы һыуҙа тотоп алырға һәм көнөнә өс тапҡыр бөткәнсе 1-әр балғалаҡлап ашарға.

### Өҙлөгөү янаһа

Тын юлдары ялҡынһынып, йә вируслы ауырыуҙар арҡаһында өҙлөгөү янаһа, бронхит, трахеит булғанда 20-шәр грамм аҡ сәскә, бәйғәмбәр тырнағы, миләүшә, һаҙанаҡ үләндәрен һәм 15 грамм татлы (ҡурйын) тамырын, 5 грамм бөтнөк үләнен ҡатнаштырып болғарға. 1 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ ҡатнашма һалып төнәтергә. Ун көн йәки ике аҙна буйына көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда 2/1 стакан эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*ӨЛӘСӘЙ КӘҢӘШТӘРЕ*

# ЭШТӘН ҠУРҠЫРҒА ЯРАМАЙ,

## эштән үлгәндәр юҡ әле

**"Торогоҙ, торогоҙ, ҡыҙҙарым! Мәктәпкә һуңлай күрмәгеҙ, ана, торналар ҙа "торррыйҡ, торррыйҡ", тип осоп үттеләр!" тип, бала сағыбыҙҙа өләсәйемдең беҙҙе һөйөп уятыуын яҙ етеп, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта башлаған һайын һағынып иҫкә алам. Әлбиттә, сит-ят ерҙәрҙә уҡып йөрөгәндә иркәләп уятыусы юҡ. Дәрестәр, семинарҙар араһында "Бына ауылға ҡайтһам, һөтләп, ҡоймаҡлап, өләсәйҙең, әсәйҙең сәйен эсер инем", тип хыяллана йөрөргә генә ҡала.**

Һәр һүҙен мәҡәл-әйтемдәр менән тамамлап ҡуйған, күп белгән, төрлө китаптар уҡып, уларҙы беҙгә һөйләп аптыратҡан, донъялағы хәл-ваҡиғалар менән хәбәрҙар булған, алсаҡ, ярҙамсыл, изге күңелле өләсәйем янына һәр саҡ ашҡынып ҡайтабыҙ һәм уның биргән кәңәштәрен тыңлайбыҙ. Ул кәңәштәрҙе тормошобоҙҙа ҡулланабыҙ.

Һәр бер эште ихлас күңел, күтәренке кәйеф, таһыллыҡ менән башҡарыр кәрәк, ти өләсәй. Шунда ғына уның һөҙөмтәһе күңелде һәм күҙҙе ҡыуандырыр, үҙеңдән ҡәнәғәтләнеү тойғоһо алырһың. Эштән ҡурҡырға ярамай, сөнки унан берәүҙең дә үлгәне юҡ. Тик уны башҡарған ваҡытта мөмкинлектәреңде, көсөңдө иҫәпкә алырға тейешһең.

Иҙән йыуғанда эҫе һыу менән йыуырға ярамай, юғиһә, буяулы иҙәндең ялтырауығы бөтә, ти өләсәй. Мейестән яңы ғына сыҡҡан эҫе икмәкте телгән саҡта бысаҡты ҡайнап ултырған самауыр быуына тотоп ала, шулай итһәң, телемдәр матур килеп сыға тип өйрәтә. Кер йыуыуҙың да үҙ серҙәре бар икән: уны сайҡатҡан ваҡытта тоҙ һалырға кәрәк, шул саҡта ул матур булып кибә, туҡыма сифатын тиҙ юғалтмай. Турар алдынан һуғанды һыуыҡ һыуға һалып алырға ла ул өйрәтте. Иламай ғына ла һуған турап булғанлығына инандыҡ шунан. Икмәк баҫҡан сағында уға саҡ ҡына шәкәр һалып ебәреүен күреп ҡалдыҡ. Ни өсөн улай иткәнлеген һорауға, еңел ҡабарһын өсөн, тип яуапланы. Мейес аҡлаған ваҡытта йоҡмай ыҙалатҡан эзбизде әрләп, сығырҙан-сығырҙай булып йөрөгәндә өләсәйем тыныс ҡына килде лә тоҙ өҫтәне. Шунан һуң ғына эшем ырамлы китте.

Бер саҡ һеңлемдең тәҙрә йыуған һыуға тоҙ һалыуын шәйләнем, унан ыңғай яуап алырымды көтмәһәм дә, ҡыҙыҡһыныуым еңде, ни эшләп улай итеүен һораным. Шаярып, гел кире һөйләшкән шаян туғаным был юлы ла, ҡыш еткәс белерһең, тип кенә ҡуйҙы. Асыҡланыуынса, тоҙло һыу менән йыуылған тәҙрәләр ҡыш көнө туңмай икән.

Өләсәйем биргән аҡылдың һәр береһен һанай китһәң, моғайын, әллә нисә бит ҡағыҙ тулыр ине. Уның һәр бер кәңәшен күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышабыҙ.Ҡәҙерле кешебеҙҙең артабан да аҡыллы фекерҙәре менән тормош юлында беҙгә дөрөҫ юл күрһәтеп, оҙаҡ йәшәүен теләйбеҙ.

**Дилә СӘЛИХОВА, студент.**

*ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ…*

**Аллаһы Тәғәлә балаларҙы ергә бәхетле булыр өсөн яралта, атайлы, әсәйле итеп тыуҙыра. Сабыйҙың шатлыҡлы көлөүе - ерҙәге иң матур моңдор. Тик ҡайһы саҡта, тәбиғәт ҡанундарына ҡаршы барып, сабый иң яҡын кешеләрһеҙ тороп ҡала. Әммә Аллаһы Тәғәлә уларҙы ярҙамһыҙ ҡалдырмай - юлдарына изгелекле ҡурсалаусыларҙы сығарып ҡуя. Ошо көндәрҙә 90 йыллыҡ оло юбилейын билдәләгән Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се балалар йорто күпме етем-еһер өсөн ата-әсә, ҡурсалаусы ролен башҡарҙы икән! Балалар йорто директоры Фәнисә Малик ҡыҙы БӘҘРЕТДИНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**



Юлаевсылар балалар янында.

# ТУҠҺАН ЙЫЛ БУЙЫ…

## бала күңеле һағындалар

### Атайлы-әсәйле булыу хыялы

Балалар йорто директоры булып эшләй башлауыма етенсе йыл китте. Ошо ваҡыт эсендә шуны аңланым: бер ниндәй уңайлы йәшәү шарттары ла, тәрбиәселәрҙең балаларға ҡарата йылы мөнәсәбәте, мөхәббәте лә балалар йортонда тәрбиәләнгән сабый күңелен тулыландыра алмай. Тик ғаилә генә балаға ҡанат ҡуя. Ошо хәҡиҡәткә инанып, 2007 йылда беҙҙә балаларҙы ғаиләгә урынлаштырыу буйынса патронат тәрбиә хеҙмәте эшләй башланы. Шул ваҡыттан алып тәрбиәләнеүселәрҙең атайлы-әсәйле булыу хыялын тормошҡа ашырыу мөмкинселеге артты. Был бик игелекле башланғыс. Хеҙмәт эшләй башлағандан бирле 100 баланы ғаиләле иттек. Тик беҙгә һан түгел, сифат мөһим. Ошо 100 баланың 81 процентында уҡыуҙа өлгәшеү кимәле күтәрелгән, биш балала "психик үҫеш тотҡарланыуы" диагнозы алынған, ике тәрбиәләнеүсе инвалидлыҡтан төшөрөлгән.

Патронат тәрбиә хеҙмәтенә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелгән, сөнки улар сабыйҙарҙың яҙмышын хәл итә бит. Был өлкәлә беҙҙә ике социаль педагог һәм ике педагог-психолог эшләй. Улар буласаҡ патронат атай-әсәйҙәргә 36 сәғәткә иҫәпләнгән программа буйынса әҙерлек курстары үткәрә. 2010 йылдан М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология кафедраһы менән берлектә балаларҙы ла ғаиләгә барыр өсөн махсус әҙерләй башланыҡ.

### Туғанлыҡ ептәре

Һәр етем сабый бәлиғ булғас үҙ тамырҙары тураһында тағы ла тәрәнерәк уйлана, уларҙы эҙләп табыу теләге менән яна башлай. 2008 йылда беҙҙең балалар йортонда Ата-әсә ҡарауынан мәхрүм булған һәм етем балаларҙы ғаиләгә урынлаштырыу республика үҙәге менән берлектә "Туғанлыҡ ептәре" тип аталған эксперименталь майҙансыҡ эшләй башланы. Был программаның төп маҡсаты - патронат тәрбиә сиктәрендә балаларҙың ҡан-ҡәрҙәш ғаиләләре менән эшләп, уларҙы үҙ ғаиләһенә ҡайтарыу мөмкинлеген эҙләү. Йүнәлештең дөрөҫлөгөнә инандыҡ: мөғжизәләр тормошта урын таба башланы. Беҙҙең бер инвалид малайыбыҙ балалар йортона алты йәшендә килгәйне. Килгәндән алып тәҙрәгә ҡарап ултыра ла, Алланан әсәһен килтереүҙе һорай ине. Һәм бына 7-8 йыл үткәс, уның әсәһен таптыҡ. Ул балаһын үлгән тип уйлаған. Осрашыу мәлдәрен күрһәгеҙ икән! Эштең тәүге этабында патронат һәм стационар хеҙмәт белгесе баланың үҙе, тыуған ғаиләһе, туғандары һәм яҡындары тураһында мәғлүмәт йыя. Артабан шул мәғлүмәтте иҫбатлау өсөн район хакимиәтенә шылтырата, хаттар яҙа, баланың тыуған ғаиләһе йәки туғандары менән күрешергә, йәшәү-көнкүреш шарттарын тикшерергә сыға. Юридик, психологик, медицина белгестәре ярҙамға йәлеп ителеп, кәрәкле эштәр уңышлы башҡарылғандан һуң, бала ғаиләгә тапшырыла. Үҙ ата-әсәләренә ҡайтарыу сабыйҙар өсөн дә, ата-әсәләр һәм, әлбиттә, беҙҙең өсөн дә ҡыуаныслы хәл. Әммә шул уҡ ваҡытта иң көсөргәнешлеһе лә. Ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгән ғаиләне һауыҡтырыу, был хоҡуҡты яңынан яуларға ярҙам итеү бик күп ойошмалар менән тығыҙ бәйләнеш булдырыуҙы талап итә.

### Һәләтлеләргә ярҙам

Тәрбиәләнеүселәрҙең аҙ ғына ла буш ваҡыты юҡ тиерлек. 99-сы ҡала мәктәбенә йөрөйҙәр. Ата-әсәле балалар менән бергә белем алыу уларҙың аралашыу даирәһен киңәйтә, күңелдәрен байыта. Мәктәптән һуң балалар йортонда эшләп килгән төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнәләр. Минең уйымса, тәүҙә- тәрбиә, шунан - белем. Бала гел "бишле" билдәләренә генә уҡымауы мөмкин, әммә уның икенсе матур һәләттәре булыуы шикһеҙ. Беҙҙең түңәрәктәр һәр баланың ижади һәләтен асыҡларға һәм тормошҡа ашырырға ярҙам итә. Сөнки бала үҙен ҡыҙыҡһындырған шөғөл булмағанлыҡтан, кире күренештәргә, насар уйҙарға бирелеп китеүсән. Район, ҡала, республика кимәлендәге конкурстарҙа ҡатнашып, тәрбиәләнеүселәребеҙ һәр ваҡыт призлы урындар яулай. Эшебеҙҙең йәнә бер мөһим йүнәлеше - сабыйҙы рухлы, илһөйәр итеп тәрбиәләү. Башҡорт балалар йорто булғас, беҙ башҡорт теле, ғөрөф-ғәҙәттәр, тарих, фольклорға айырыуса иғтибар бүләбеҙ, балалар маңҡорт булып үҫмәһен, тибеҙ.

### Коллективтағы мөнәсәбәттәр йылылығы

Балалар йортонда эшләү - ул һөнәр генә түгел, йәшәү рәүеше булырға тейеш. Сөнки беҙ балалар йортона эшкә килгән кеүек килмәйбеҙ, ә үҙебеҙҙе ҙур ғаиләгә, йортҡа ҡайтҡан кеүек хис итәбеҙ. Һәм балалар ҙа быны һиҙә. Баланың күңел торошо беҙҙең уға ҡарата һәм бер-беребеҙгә булған мөнәсәбәттән тора. Шулай уҡ етемдәрҙе һуҡырҙарса йәлләү, һуҡырҙарса яратыу ҙа яҙыҡ. Үҙ балаңа ниндәй мөнәсәбәт булһа, бында ла дилбегәне тығыҙыраҡ та тоторға, бушатып та алырға кәрәк.

Һәләтле балаларға ярҙам күрһәтеү маҡсатында 2006 йылда "УралСиб өмөт бирә - белем, эш, торлаҡ" программаһы сиктәрендә беҙҙә йәнә бер эксперименталь майҙансыҡ эш башланы. Уға ярашлы, уҡыусылар мәктәп программаһын яҡшыраҡ үҙләштереү өсөн "Балалар университеты"нда өҫтәмә белем ала, шулай уҡ имтихандар тапшырыуға әҙерләнә. Һәр башланғыс ауыр бирелә. Ләкин тырышлыҡ бушҡа булмай, матур һөҙөмтәләргә өлгәшәбеҙ: 2007-2008 уҡыу йылында - 6 уҡыусы (100%), 2008-2009 уҡыу йылында - 4 уҡыусы (67%), 2009-2010 уҡыу йылында 11 уҡыусы (65%) юғары уҡыу йорттарына инде. Улар араһынан икәүһе Мәскәү ҡалаһында Юғары иҡтисад мәктәбе дәүләт университетында белем ала.

### Дуҫлыҡ менән көслөбөҙ

Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән эш был. Уны йәшәү рәүеше итеп ҡабул итәм һәм көн дә ҡыуаныс менән киләм балаларым янына. Яуаплылыҡты аңлайым - сабыйҙың киләсәге һинән дә тора.

Республика Хөкүмәте тарафынан балалар йортона иғтибар айырыуса көслө. Шулай уҡ балалар йортона һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙған, аңлап, беҙҙең уй-кисерештәребеҙ менән янып йәшәгән бағыусыларыбыҙ күп. Сөнки балаға тәрбиә биргәндә рухи ғына түгел, матди яҡ та мөһим. Беҙҙә спорт, актовый, сенсорный залдар, бассейн, сауна, китапхана, ике музей бар. Тәрбиәләнеүселәр театр, концерттарға йыш йөрөй, туристик поход, экскурсиялар ойоштторабыҙ. "Салауат Юлаев" хоккей клубы һәр саҡ беҙҙә ҡунаҡта, үҙ уйындарына ла ихлас саҡыралар. Беҙҙең балалар өсөн улар ныҡлыҡ, ир-егетлек өлгөһө. Бындай аралашыуҙар тәрбиәләнеүселәргә үҙҙәрен йәмғиәттә дөрөҫ тоторға, кешеләр менән ышаныслы аралашырға ярҙам итә. Мин һәр саҡ балаларға өҫтөгөҙҙө, тышҡы ҡиәфәтегеҙҙе ҡарап йөрөгөҙ, үҙегеҙҙе матур тотоғоҙ тип кәңәш бирәм. Аһ, бынау етем бала, тип йәлләүгә юл ҡуймағыҙ, тим. Балалар йорто ишеген ябай кешеләр асып инмәй, улар барыһы ла ниндәйҙер ихлас күңел, теләк менән килә һәм беҙҙең дуҫтарға әйләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр кеше тыуғандан алып бер көскә эйә була. Шул көстө эҙләп табыуҙан тора кешенең ғүмере, бәхете. Әгәр ҙә уны таба алмаған икән, ниндәй генә мөхит булдырылмаһын, күңеле тыныслыҡ тапмаясаҡ. Ул көс, йәғни үҙ-үҙеңә ышаныу, маҡсаттарыңа инаныу, үҙең ҡәҙерләп ҡорған эске донъяңдың бөтөн, ныҡ һәм ҡабатланмаҫ булыуын тойоу кешенең иңенә ҡанаттар ҡуя. Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се балалар йорто үҙ тәрбиәләнеүселәренә ошо көстө табып, тормош юлында ныҡлы баҫып торорға ярҙам итә лә инде.**

**Ҡарлуғас ИШЕМҒОЛОВА яҙып алды.**

СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫНДА

# ҮҘЕГЕҘҘЕ ЯҠЛАҒАН КЕҮЕК...

## телегеҙҙе яҡлағыҙ!



**Бына нисәмә йылдарҙан һуң тағы ла Арғаяшҡа сәфәр сығыу насип булды. Унда беҙ районДың мәғариф хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәһендә ҡатнашмаҡсыбыҙ. Кәңәшмәне Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә район мәғариф бүлеге ойошторған. Ҡоншаҡ, Сосновка районДарынан да мәктәп директорҙары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, мәғариф ветерандары саҡырылған. Башҡортостандан беҙ өсәүбеҙ - республика Мәғариф министрлығының милли мәғариф бүлеге мөдире Рәйсә Күзбәкова, күренекле шағир һәм прозаик Мәүлит Ямалетдин һәм мин, ошо юлдарҙың авторы. Көн тәртибенә бер мәсьәлә ҡуйылғайны: хәҙерге шарттарҙа төбәк мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙың проблемалары.**

Дүрт сәғәткә яҡын дауам итте был эшлекле һәм фәһемле кәңәшмә. Был мәсьәләнең сит өлкә шарттарында беҙҙең үҙебеҙҙәгенән күпкә ҡатмарлыраҡ булғанлығы аңлашылып тора. Шарттар ҙа, мөмкинлектәр ҙә бөтөнләй башҡаса. Ләкин шул уҡ арғаяштарҙың, был фекер алышыуҙан күҙҙәребеҙ асылып ҡалғандай булды, тигән һүҙҙәрен ишетеү, туған телебеҙҙе һаҡлау өсөн ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләргә кәрәк икәнлегенә инаныуын күреү күңелдәрҙе күтәреп ебәрҙе. Кәңәшмәлә проблеманың төрлө аспекттарын анализлау нигеҙендә, аныҡ тәкдимдәр индерелеп, ҡарар ҡабул ителде. Ҡарарҙа яңы уҡыу йылы башында ошо төбәктәге башҡорт мәктәптәрендә туған телде уҡытыу мәсьәләһенә арналған ғилми-ғәмәли конференция үткәреү тураһындағы тәкдим дә урын алды. Тимәк, бер урында туҡтап ҡалмаҫҡа, нисек кенә ҡатмарлы һәм ауыр булһа ла, эште дауам итергә кәрәк.

Кәңәшмәлә "Туған телебеҙҙе һаҡлау өсөн эште нимәнән башларға?" тигән һорау бик йыш ҡабатланды. Быға яуап итеп, ошондай үтә лә мөһим тәкдимдәр һәм кәңәштәр әйтелде.

Эште, иң элек, ата-әсәләрҙе был мәсьәләнең мөһим булыуына инандырыуҙан башларға кәрәк, тине уҡытыусылар һәм мәктәп директорҙары. Үкенескә күрә, нәҡ ата-әсәләр араһында туған телебеҙҙе уҡытыуға ҡаршы төшөүселәр һаман да табылып тора. Ундайҙар балама уҡыу йортона керергә кәрәк, урыҫ телен белһә, шул еткән, тип ҡарай. Әлбиттә, нығ яңылыша улар. Беҙгә башҡорт телен белеү бары тик урыҫ телен яҡшыраҡ үҙләштереүгә булышлыҡ итеүе тураһында, ике, хатта өс телде белеү баланың, үҫмерҙең фекерләү ҡеүәһен арттырыуы хаҡында ата-әсәләргә лә, уҡытыусыларға ла төшөндөрөргә кәрәк.

Икенсе мөһим мәсьәлә: башҡорт телендә тәрбиә биреүҙе ясленән, балалар баҡсаһынан башларға кәрәк! Мәктәпкә барғанда баланың теле туған телдә асылып барһын. Башланғыс белемде үҙенең туған телендә алһа ғына, мәктәптә ул төплө белем аласаҡ. Туған телен белгән бала аҙаҡ башҡа телдәрҙе лә тиҙерәк үҙләштерәсәк. Башланғыс синыфтарҙан һуң нисек тә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өҙлөктөрмәйенсә уҡытып алып китеүгә өлгәшеү мөһим. Ғөмүмән, туған тел аша кешенең рухы үҫә, милли аң, милли тойғо формалаша икәнен һәр ата-әсәгә аңларға ваҡыт. Тарихтан күренеүенсә, телһеҙ, динһеҙ, ерһеҙ ҡалған халыҡтар, Алла һаҡлаһын, үҙҙәре лә юҡҡа сыҡҡан да баһа.

Шулар менән бергә мәктәптә тәрбиә эштәрен, төрлө ижади сараларҙы туған телдә ойоштороу бермә-бер әһәмиәтле икәне лә һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Айырым предметтарҙы өйрәнгән ваҡытта тыуған төйәктең һәм башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, йолалар һәм традициялары буйынса мәғлүмәт биреү ҙә кешенең рухын үҫтереүгә, милли аңын, тойғоһон уятыуға булышлыҡ итеүе яҡшы билдәле.

Кәңәшмәлә сит өлкә шарттарында уҡыу пландарын һайлау хаҡында ла тәкдимдәр әйтелде. Рәсәйҙең уҡыу пландарының туған телдә уҡытыу мөмкинлеген бирә торған вариантын һайлау мәнфәғәткә ярашлы буласаҡ, тине Рәйсә Күзбәкова.

Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Флүзә Фәтҡулла ҡыҙы Ғайсинаның сығышында өлкәлә һәм уның үҙәк ҡалаларында һуңғы дәүерҙә башҡорт теленең абруйы артыуы тураһындағы фекерҙәре, Арғаяш районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, өс бала атаһы Айҙар Ишбирҙиндең үҙ балаларына башҡортса тәрбиә биреү алымдары менән уртаҡлашыуы, Бүре (Ҡоншаҡ районы), Яратҡол, Аҡбаш, Ҡорман һ.б. (Арғаяш), Сиреүсе (Сосновка) мәктәптәренән килгән директорҙар һәм уҡытыусыларҙың сығыштары фәһемле булды. Кәңәшмәлә шулай уҡ элегерәк нәшер ителеп килгән "Арғужа" гәзитен яңынан сығарыу тураһында тәкдимдәр яңғыраны. Арғаяш районының мәғариф ветераны Рафаэль Мөхәмәтжанов (Бәжекәй ауылы), психология фәне белгестәренә таянып: "Күп тел белгән кешеләр баш ауыртыуы һәм йөрәк сире менән һирәк ауырый", - тип, туған телде өйрәнеүҙең ни тиклем мөһим мәсьәлә булыуын тағы бер тапҡыр дәлилләп ҡуйҙы. Ул йәнә: "Хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп эш итәйек. Өҫтәлегеҙҙә һәр ваҡыт "Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһындағы законы" ҡул осонда ғына ятһын. Ундағы 9-сы статьяға таянып эш итә алаһығыҙ", - тине.

Күҙегеҙҙе һаҡлаған кеүек,
Телегеҙҙе һаҡлағыҙ!
Үҙегеҙҙе яҡлаған кеүек,
Телегеҙҙе яҡлағыҙ!
Ерегеҙҙе һаҡлағыҙ!

Минең "Һаҡлағыҙ!" тигән был шиғырымды кәңәшмәлә дәррәү ҡул сабып ҡаршы алдылар.

Рәшит ШӘКҮР.

---

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

## ҠЫШҠЫ ЙӘЙҒОР - ТЫНЫСҠА...

### йәйгеһе - уңышҡа

- Урамдағы һәр тауышҡа ҡолаҡ һалма - алтын алҡа таҡмаҫтар.
- Малым күп, тип тәләфләмә - кейәһе йөҙөңә бәрер.
- Ҡыйыш ҡыйыҡ өй йәмһеҙләй, яман һүҙ тел йәмһеҙләй.
- Күмәк ҡунаҡ - тамаша, икәүҙеке - сер табыны.
- Һыйлаһаң һыйырың - ашыңа йышыраҡ "тығыр" ҡойроғон.
- Сирен белгән табипҡа бара, наҙанлығын аңлаған аҡылға ылыға.
- Әйберҙәр ҡыйбатланғанға уфтанма: кеҫәңде нығ биклә, нәфсе телен ҡыҫҡарт, теләгеңә кәртә ҡуй.
- Егәрлемен тип һәр ҡушҡан эште эшләмә - һапһыҙ ҡара балтаға әйләнерһең, кәрең кәмер, ҡәҙерең китер.
- Үҙ башың булмаһа, ел осорған көҙгө япраҡ һин.
- Үҙеңде бик аҡыллы, бик белдеклегә һанама - ундайҙар юлдан яҙа, аҙаша.
- Һаҡау, һуҡыр, һаңғырауҙы кәмһетмә: һаҡау ике телле, һуҡырҙа өс күҙ, һаңғырауҙа һаҡ ҡолаҡ.
- Һүҙгә оҫта булһаң да кемгә, ҡасан һөйләргә кәрәклеген иҫтә тот.
- Ҡышҡы йәйғор тыныҫҡа, йәйгеһе - уңышҡа. Ҡышҡы йәйғор тын тартһа, йәйгеһе дым тарта, тип тә әйтәләр.
- Кәкре мөрйә төтөн еҫкәтә, ялҡаулыҡ өҙлөкһөҙ иҫнәтә.
- Эткә ҡарап эт булма - үҙ-үҙеңде тешләрһең.
- Уҫал эт буранда, яман ир болала ҡотора.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

---

БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Әхмәҙей Мортазин

Әхмәҙей Фаварис улы Мортазин 1883 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральский өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың ике туған ағаһы. Ауылда мәҙрәсә тамамлай. Батша армияһында хеҙмәт итеп ҡайта. Беренсе донъя һуғышы башланғас, уны тағы армияға алалар. Бында ул өлкән унтер-офицер званиеһын ала. 1917 йылда 42-се пехота дивизияһында хеҙмәт итә. Ошонда коммунистар партияһы сафына алына.

Хеҙмәттән ҡайтҡас, Әхмәҙей Мортазин Верхнеуральский өйәҙе советы ағзаһы итеп һайлана. Күбәләк-Тиләү улысында совет власын урынлаштырыу менән шөғөлләнә. "В 1918 году я служил в уездном совете в г.Верхнеуральске. В том же году я был делегирован уездным советом на съезд в Москву и во время следования в Москву под Уфой я был захвачен белыми, которыми и отправлен было в г.Верхнеуральск", - тип яҙа үҙе тураһында Ә.Мортазин.

Вернеуральскийға китеп барышлай Ҡаҙаҡҡол ауылында уны аҡтар яғында ойошторолоп ятҡан 1-се Башҡорт кавалерия полкына алып ҡалалар. 1919 йылдан Муса Мортазиндың полкында йөрөй. 1919 йылдың авгусында, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы ҡыҙылдар яғына сыҡҡан саҡта бригаданың тәьминәт бүлеге начальнигы, артабан 5-се (артабан 27-се) полктың хужалыҡ бүлеге начальнигы булып хеҙмәт итә. Бригада менән Урал, Польша фронттарында ҡатнаша.

Муса Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса, Әхмәҙей Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" исемле китапта (Мәскәү, 1926) уның исеме телгә алынмай. Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай.

Әхмәҙей Мортазин фронттан ҡайтҡас, Күбәләк-Тиләү улысы башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлана, һуңынан Арғаяш кантонында эшләй. 1921 йылда партия сафтарын таҙартыу эше башлана. 1921 йылдың ноябрендә РКП(б)-ның Тамьян-Ҡатай кантоны комитеты Әхмәҙей Мортазиндың аҡтар яғында булыуын иҫкә төшөрә. Уны партиянан сығаралар. Партиянан сығарған саҡта тартып алынған партбилеты Ә.Ф.Мортазиндың "Личное дело"һында һаҡлана (ЦГАОО РБ. Ф.22. Оп.2. Д.492.). Уның 666387 һанлы партия билетында бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр теркәлгән. "Были ли за границей и где" тигән графала: "в Японии и Китае", тип яҙылған. Әхмәҙей Мортазин был илдәргә ҡасан һәм ни рәүешле барып йөрөгән булғандыр, билдәһеҙ.

Ул 30-сы йылдарҙың аҙағында Учалы алтын приискыларында эшләй. 1937 йылдың 24 авгусында Әхмәҙей Мортазин НКВД тарафынан ҡулға алына. Был ваҡытта инде Муса Мортазин да НКВД органдары ҡулы аҫтында була. Өс айҙан ашыу төрмәлә утырғандан һуң 1937 йылдың 8 декабрендә Ә.Мортазин атыла. 1956 йылдың 16 июнендә реабилитациялана.

Азат ЯРМУЛЛИН.

# БАШҠОРТЛОҠ – ХОҘАЙ

## шул һынауҙы үтә алмағандар

**Дәүләкән районы Мәкәш ауылында тыуып үҫеүсе хажиә Клара Мөхәмәҙи ҡыҙы ХӘМИҘУЛЛИНАның дини тәғлимәткә, тарихыбыҙға, рухи булмышыбыҙға ҡарата берәүҙекенә лә оҡшамаған үҙ ҡарашы, үҙ фекерҙәре бар. 1966 йылда Свердловскиҙа Урал университетының иҡтисад факультетын "отлично" билдәһенә тамамлағандан һуң Клара апай алдында оло фән, ғилем юлдары асыла, карьера баҫҡыстары ла һыҙатлана. Әммә ул тыуған яғына, туғандарына тоғролоҡ һаҡлаған зат булараҡ, уларҙан айырылмай, тыуған төйәгендә хеҙмәт итә һәм әле лә тыуған ауылы Мәкәшендә йәшәй. Уның ҡарауы, юғары белемле интеллектуал юғалып ҡалмай, хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң Аллаһҡа һыйына, дини ғилем эстәү юлына баҫа, әле яңыраҡ "Ғәлиә" мәҙрәсәһен тамамлап, диплом алды. Хәйер, был хаҡта уның менән булған әңгәмәнән уҡып белерһегеҙ.**

### Үтә тыйнаҡлыҡ - етешһеҙлек тә

Мин урта мәктәпте хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика интернат-гимназияһында тамамланым. Директорыбыҙ Төхфәт Аслаевтың күңел йылылығын әле булһа тойоп йәшәйем. Коридорҙа шаулаша башлаһаҡ, уның яныбыҙға килеп, тауышын күтәрмәй генә: "Тауышланыуҙы туҡтатығыҙ!"-тип кенә әйтеүе лә беҙгә етә торғайны. Аҙаҡ Свердловск ҡалаһында университетта уҡыным. Атайыбыҙ ауырыу, үҙемдән бәләкәй тағы ла биш бала булғас, өй яғынан ярҙам да етерлек булманы. Шуға күрә икешәр-өсәр көн бер нәмә лә ашамайынса, ас йөрөгән саҡтарым да булды. Хәҙер генә аңлайым үҙемдең хатамды. Үтә тыйнаҡлыҡ, ярлы булһаң да, ас булһаң да, әллә кем булып, һыр бирмәҫкә тырышып йөрөү Ислам дине күҙлегенән етешһеҙлек, гонаһ булған икән дә. Мосолмандар араһында булһа, мәсеткә бараһың да, оялмайса: "Туғандар, мөмкинселегегеҙ булһа, мине ашатып ебәрегеҙ, мин асмын", - тип әйтергә кәрәк булған икән.

Уҡыуҙы тамамлағас, артабан Мәскәүгә аспирантураға уҡырға барырға ла тәҡдим иттеләр. Ә мин туғандарымды ҡарар өсөн тыуған ауылыма ҡайттым. Ғүмер буйы колхозда иҡтисадсы булып эшләнем. Шофер булып эшләүсе ауылдашым Миңзаһир исемле егеткә кейәүгә сыҡтым. Үтә тыйнаҡ, тотанаҡлы булды ирем. Ул һәр ваҡыт минең кимәлгә ынтылып йәшәне, уҡырға, белем алырға тырышты. Йоматау техникумында уҡығанында ирем минең уҡыусым булды, мин уны бухучет буйынса уҡыттым. Аҙаҡ ауыл хужалығы институтын ситтән тороп уҡып тамамланы. 26 йыл буйы колхоз рәйесе булып эшләне.

Үлем түшәгенә ятҡас та үтә тыйнаҡ, сабыр булды ул. Шул хаҡта уйлаһам, әле лә һоҡланам уға. Тәүҙә барлыҡ донъяһын, уйҙарын, тойғоларын ипкә килтерҙе. Балаларға һәм миңә әйтер һүҙҙәрен көн һайын яйлап-яйлап әйтте, беҙҙе лә ошо рәүешле үҙенең үлеменә әҙерләне. "Бер ваҡытта ла бер кемгә лә барып әйбер һорама, ана , был хаҡта балаларыбыҙға ла әйтеп китәм, улар һине ҡарарҙар..." тип әйтте бер көн килеп.

Элек-электән беҙҙең халыҡта өйләнмәү йә кейәүгә сыҡмау оло ғәрлек һаналған. Миңзаһир буйҙаҡлыҡҡа ҡаршы ла көрәште. Йыйылыш һайын буйҙаҡтарҙың исемлеген төҙөп, уларға ҡаты төрттөрөп сығыш яһар ине. Шуға күрәлерме, ул улдарыбыҙҙың да өйләнеп донъя ҡороуын беренсе планға ҡуйҙы. Ҡайһы бер атайҙар һымаҡ мотлаҡ юғары уҡыу йортонда уҡытырға ынтылманы. Уның ҡарашы шундай ине: юғары белемле булып та, ғаилә ҡора алмаған кешенән ни фәтеүә? Икенсенән, ҡалаларға барып белем алған, башҡа диндәге, башҡа милләттәге ҡыҙҙарға өйләнеп, башҡалар өсөн балалар тыуҙырған юғары белемле ир-егеттәргә ҡарағанда, ауылда ҡалып, үҙ милләтең өсөн балалар үҫтергән ир-егет күпкә кәрәгерәк һәм файҙалыраҡ. Күп осраҡта тыйнаҡ егеттәр өйләнмәй, тыйнаҡ ҡыҙҙар кейәүгә сыҡмай ҡала. Милләт, ил өсөн күпме балалар тыумай ҡала.

Ҡыҫҡаһы, өҫтә әйтелгәндәрҙән сығып шуны әйтер инем: үтә тыйнаҡлыҡ, әлбиттә, әҙәм балаһын күркәмләй торған сифат. Әммә беҙҙең халыҡ миҫалында был сифаттың кире яҡтары күберәк шул. Беҙ күберәк башҡаларҙың күңелен уйлап йәшәйбеҙ.

### Ут асылы

Һуңғы йылдарҙа донъяла оло янғын бара. Урмандар яна, ҡала-ауылдар яна, беҙҙең ауыл эргәһендәге ер аҫтында торф яна. Был яныуҙар йылдарҙың ҡоро килеүенә генә лә бәйле түгелдер. Сөнки кешегә файҙалы булыр өсөн тәбиғәт, Хоҙай тарафынан бар ителгән байлыҡтар ғына түгел, әҙәм балаһы үҙе, уның үҙен бәхетле итер мөмкинлектәре, ғүмере лә яна. Тәбиғәттәге яныуҙар кешеләге яныуҙарҙың сағылышы ғыналыр. "Урал батыр" эпосында кешеләр арыҫландар, ҡоштар, балыҡтар менән бергә йәшәй. Кешене башҡа тере йәндәрҙән нимә айыра башлай? Әлбиттә, ут. Йәнлектәр, хайуандар уттан ҡурҡа, уға яҡынлай алмай, ә кешеләр утты үҙенә хеҙмәт иттерә һәм шуның менән башҡаларҙан айырыла. Шулай итеп, ут кешенең йәшәү ҡоралына, сараһына әүерелгән. Бөгөн ана шул беҙҙе йәшәтә торған сарабыҙ ҡулыбыҙҙан ысҡынып китте лә, донъяны ла, үҙебеҙҙе лә яндыра башланы. Утҡа беҙ бөгөн хужа түгел, ут беҙгә хужа.

Дин - төрлө сифаттағы йәндәрҙе ойоштороп, Аллаһы Тәғәлә хозурына алып бара торған юл.

Дин ул - ниғмәт. Беҙ айҙар буйы ураҙа тотоп, һауа менән туҡланған кеүек, ғүмер буйы йәнебеҙ Аллаһ нуры менән туҡлана. Ошо талап үтәлмәгәнгә күрә лә әҙәм балаһы утты ҡулдан ысҡындырҙы.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, ут шайтан ҡоралы ла, йәғни кеше ҡулынан ысҡынған ут шайтанға хеҙмәт итә башлай. Шайтан ут менән донъяны яндырып, кешенең йәшәр мөхитен тарайтҡандан-тарайта бара. Мөхит тарайған һайын, уттың даирәһе киңәйә. Әгәр ҙә кеше үҙенең бөйөклөгөн аңлаһа, "мине Хоҙай яралтҡан, үҙем теләп тыумағанмын", тип, үҙенең ҡабатланмаҫ зат булыуын аңлаһа, хаталар яһамаҫ ине. Был хәҡиҡәтте дин аңлата, тик кешеләр аңламай.

Хоҙай нуры менән һуғарылып йәшәмәгән кеше утҡа тиҙ бирешә. Ут кешенең үҙендә лә бар. Кем белә, Хоҙай уны яндырмай һаҡлар өсөн дә кешенең иң ҙур дәүмәлен һыуҙан әүәләгәндер. Ҡайһы бер кешеләрҙең үҙенән-үҙе тоҡанып китеүе лә тарихта билдәле. Иманлы кешеләрҙең йөҙҙәре лә матур була, иманһыҙҙарының йөҙө ҡара янып йөрөй. Шулай итеп, кеше күңелендәге ут тәбиғәткә, мөхиткә сыға. Яныуҙар иң әүәл кеше күңелендә башлана.

Ғөмүмән, кешенең мөхитен бар иткән һүҙҙәр ике-өс хәрефтән генә тора. Ут, һыу, ер, ел, Ошондай ғына өндәрҙән торған төшөнсәләр менән әҙәм балаһы үҙенең мөхитен ниндәй кимәлгә күтәрә йә юҡҡа сығара ала. Беҙҙең халыҡта Хоҙай бәндәһе тигән һүҙ бар. Беҙ үҙебеҙҙең Хоҙай бәндәһе булыуыбыҙҙы онотмаһаҡ ине. Хоҙай һәр кемгә бәхетле ғүмер кисереп, донъяһын гөлсәскәгә әүерелдерер өсөн барыһын да бирә. Беҙ шул низам менән генә биргәнде файҙаланып, бәхетле йәшәү урынына, ғүмеребеҙҙе файҙаһыҙға әрәм-шәрәм итеп яндырабыҙ ғына. Кешелектең, милләтебеҙҙең ниндәй мөмкинлектәре, аҫыл ғүмерҙәре яна шул утта.



**_Беҙ - башҡорт. Мөхитебеҙ - Уралда. Ер шары сикләнгән. Урал тауының анау яғында һары расалар ер бушағанын көтөп тора. Аллаһы Тәғәлә әле уларҙы үрсетә. Әгәр ҙә беҙ ғәзиз Ватаныбыҙҙың ҡәҙерен белмәһәк, киләсәктә улар бында киләсәк. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә: "...мин һеҙҙе икенсе халыҡ менән алмаштырам, әгәр ҙә мине танымаһағыҙ..." - ти. Бына минең тыуған яғымдағы Асылыкүлде ниндәй хәлгә әйләндерҙек? Әгәр ҙә унда ҡытайҙар килһә, киренән "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосындағы диңгеҙгә әйләндерер ине._**

Кешеләр миллиардтар, триллион һумдар түгеп йыһанды, башҡа планеталарҙы өйрәнә. Улар беҙгә тәғәйенләнмәгән, Ҡөрьәндә был хаҡта әйтелмәгән. Беҙгә Ер генә тейеш. Беҙгә икенсе ғаләмдәргә артылып, аҫтағы Ергә ҡарарға түгел, күңелебеҙ менән өҫкә күтәрелеп еребеҙгә ҡарарға кәрәк. Ғәләмдәге үҙебеҙгә тәғәйенләнгән бәләкәй генә төйәгебеҙҙе ҡәҙерләп йәшәү урынына, яңынан-яңы планеталар асабыҙ, үҙебеҙгә тәғәйенләнмәгәнгә ынтылабыҙ, тапҡан-таянғаныбыҙҙы шуға һалабыҙ. Шул уҡ ваҡытта ерҙә күпме кешеләр ас-яланғас ултыра. Хоҙайҙың ниғмәте сикһеҙ, кеше ас, яланғас. Кешелеккә тәғәйенләнгән ниғмәтте ситкә ебәргән өсөн дә ут яҙаһын татыйбыҙ.

### Башҡортлоҡ - милләт кенә түгел...

Беҙ - башҡорт. Мөхитебеҙ - Уралда. Ер шары сикләнгән. Урал тауының анау яғында һары расалар ер бушағанын көтөп тора. Аллаһы Тәғәлә әле уларҙы үрсетә. Әгәр ҙә беҙ ғәзиз Ватаныбыҙҙың ҡәҙерен белмәһәк, киләсәктә улар бында киләсәк. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә: "...мин һеҙҙе икенсе халыҡ менән алмаштырам, әгәр ҙә мине танымаһағыҙ..." - ти. Бына минең тыуған яғымдағы Асылыкүлде ниндәй хәлгә әйләндерҙек? Әгәр ҙә унда ҡытайҙар килһә, киренән "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосындағы диңгеҙгә әйләндерер ине. Беҙ динле булмағанлыҡтан, кире ҡырағайлыҡҡа ҡайтабыҙ ҙа инде. Хатта хайуан да бындай хәлгә төшмәй. Хәҙерге кеше машинаһы менән Асылыкүл ярына килеп туҡтай һәм һыуға кистереп тороп уны йыуырға керешә. Әгәр ҙә Хоҙай кешенең 84 процентын һыуҙан яралтҡан икән, шул күл ситендә машинаһын йыуыусы кеше һыуҙы бысратып, асылда, үҙен бысратҡанын ғына аңламай. "Әйт: "Беләһегеҙме, һеҙҙең эсәр һыуығыҙ Ергә бик тәрәнгә китһә, кем һеҙгә шишмә урғылтып бирер?"-тиең", тип әйтелә "Әл-Мөлк" сүрәһенең 30-сы аятында. Бына быltырғы ҡоролоҡта беҙ эсәр һыу ҡытлығын да тойоп өлгөрҙөк. Шишмәләр, ваҡ йылғалар ҡороп ҡына ҡалманы, тәрәндән һыу сығарыусы скважиналарҙан да һыу сыҡмай башланы. Ҡот осҡос хәл бит. Һыу бер генә көн булмаһа, кеше шундуҡ төшөнкөлөккә бирелә һәм Аллаһы Тәғәләне иҫенә төшөрә. Кем белә, бәлки, һыу бысраҡ ер өҫтөнә сығырға оялалыр? Бәлки, һыуҙың йәне барҙыр? Беҙ һыу менән һөйләшеүҙе онотҡас, был хәлде аңламайбыҙ. Нәнәйем "Шишмәнән ҫыйыр кеүек ятып эсмәгеҙ" тип, һыуҙы "Кәүҫәр" сүрәһен уҡып ҡына эсергә өйрәтә торғайны.

Милләт - Хоҙай ниғмәте. Милләтте Ул кешелеккә бүләк иткән. Был һүҙҙе бик һаҡ ҡына ҡулланырға кәрәк. Башҡорт кешеһенә башҡорт мөхитендә йәшәүе рәхәт, татарға - татар, урыҫҡа урыҫ мөхитендә рәхәт. Бындай бәйләнеш ҡайҙа ята һуң? Ҡандамы? Ҡандамы? Ҡәлептәме? Күңелдәме? Рухтамы? Хоҙай Тәғәлә булдырған был бәйләнеште. Һуңғы ваҡытта дингә килеүсе, намаҙға ултырыусы кешеләр арта бара һәм мин дә шул юлда булғас, үҙем һымаҡ кешеләр араһында булғым килә. Улар менән ниндәй телдә аралашһам да, миңә улар араһында рәхәт. Бынан тыш, мин һәр ваҡыт үҙебеҙҙең телдә аралашҡан милләттәштәремә ынтылам. Уларҙың күбеһе намаҙ уҡымаһа ла, улар менән аралашыуы миңә шулай уҡ рәхәтлек бирә. Милләттәшемә диндәшемә тартылғандай тартылғас, милләтте лә Хоҙай барлыҡҡа килтергән. Беҙҙең милләт - Рәсәйҙең ҡәлебендә ултырған һайланмыш милләт ул. Быны беҙ, башҡорт рухлы булғандар, бик яҡшы аңлайбыҙ, шул уҡ ваҡытта ни өсөн шулай икәнлеген аңлата ғына алмайбыҙ. Юҡҡа ғына Арҡайым беҙҙә урынлашмаған, "Урал ба-

тыр" эпосы ла юҡҡа ғына беҙҙең ерлектә тыумаған.

Бына "башҡорт" һүҙен төрлөсә аңлатырға маташалар. Фараздарҙың ниндәй генәләре юҡ, ғалимдар ни тиклем күпте белгән булһа, фараздары шул тиклем ҡатмарлы. Ә бит шуны ябай ғына итеп аңлатырға була. Бының сере шулай уҡ "Урал батыр" эпосында ята. Тәүге кешенең теле януар-ҡоштарҙың теленә бик яҡын булған. "Ул ҡәләм менән яҙырға...кешене үҙе белмәгәнгә өйрәтте" тип әйтелә "Әл-ғәләҡ" сүрәһенең 4-5-се аяттарында. Тимәк, әҙәм балаһы һөйләшергә лә белмәгән һәм Аллаһы Тәғәлә уны һөйләшергә лә өйрәткән. Артабан эволюция тел яҙҙамында киткән, Хоҙай тәүге һүҙҙәрҙе генә өйрәткән. Ул һүҙҙәр 2-3 өндән генә торған. Әйтәйек, "ҡор" йәки "кар", "ут" йәки "ат". Ҡорҙар һәм тауыҡтар "ҡор" һүҙен ҡулланып ҡорҡолдай, ҡарғалар "ҡар" менән ҡарҡылдай. Тәү телдә "ҡорт" януар, йәнлек, бүре тигәнде аңлатҡан. Тимәк, януарҙарҙан, йәнлектәрҙән, ҡоштарҙан айырылып киткән кеше баш-

ге кеше ни өсөн башҡорт булмаһын ул?"- тип әйтелә. Минеңсә, башҡортлоҡ тап шунан килә. Башҡортлоҡ милләт кенә түгел, тигәндә аңлата булыр был һүҙҙәр.

Башҡортлоҡтоң милләт кенә булмауын белдергән тағы ла бер кисерешем хаҡында. Улыбыҙ әрме хеҙмәтенә Афғанстанға эләкте. Ике айға ғына бер тапҡыр хаты килә, уның өсөн нык борсолабыҙ. Бала бер минутҡа ла күңелебеҙҙән сыҡмай. Бер мәл йоҡлап ятһам, төш аралаш әрмеләге улымдың "Әннә" (беҙҙең яҡта әсәйҙе әннә тиҙәр) тип ҡысҡырыуын ишетеп уяным киттем. Һикереп тороп ултырҙым, йөрәгем һулҡылдап тибә. Мине күреп уянған иремде тынысландырҙым да, тышҡа сығып киттем. Эй, ул көндәге таңдың хозурлығы! Эй, һандуғастар үҙәкте өҙҙөрөп һайрай! Бөтөн донъя тын, ауыл рәхәтләнеп йоҡлай. Улым әрменән отпускыға ҡайтҡан да, тәҙрә төбөнә килеп, беҙҙе уяталыр тип уйлайым. Йоҡом ҡасты, өйгә инеп яттым да, уйға ҡалдым. "Ни булды был, балам шулай йән бирҙеме?" тип

хисе ярала, йәғни дөйөм мәғлүмәт мөхите кешелекте хаосҡа алып килә. Был дәүерҙе хатта ата - улды, инәй ҡыҙҙы танымаған дәүер тип тә атайҙар. "Эдип комплексы"ның да нигеҙе ошоға бәйле. Сөнки кешеләрҙең бер ҡәүем булып йәшәүе шул тиклем уларҙы яҡынлаштыра, хатта Эдип батша үҙенең әсәһенә ғашиҡ булып, атаһы уны үлтерә. Тап шуның өсөн Хоҙай кешеләрҙе халыҡтарға бүлеп, уларға айырым тел, йәшәргә ер биреп, бер-береһен аңламаҫлыҡ хәлгә ҡуйып, улар араһында конкуренция барлыҡҡа килтерә һәм ошо юл менән дөйөм кешелектең эволюцияһына нигеҙ һала. Был хәл үҫешкә бер баҫҡыс ролен дә үтәй. Кешелек, ғөмүмән, айырым милләттәр ҡорған дәүләттәр шартында үҫешә.

Хәҙерге заманда беҙ тағы ла ностратик дәүергә кире әйләнеп ҡайтабыҙ кеүек. Хәҙер ҙә Хоҙай барлыҡҡа килтергән милләттәр араһындағы айырмалыҡ юҡҡа сығарыла. Был махсус рәүештә эшләнә. Беҙ хәҙер Ер шарының теләһә ниндәй нөктәһенә баҫып,

торған китаптарын уҡығанда ошо һорауҙы мин үҙемә йыш бирәм. Был һорауға яуапты мин бер ни тиклем "Мәмерйәләр" сүрәһендә лә таптым. "Шунан Беҙ мәмерйәлә уларҙың ҡолағын күп йылға көпләп йоҡлатып ҡуйҙыҡ. Һуңынан шунда ултырған ваҡыттарын ҡайһы төркөмө яҡшыраҡ иҫәпләгәнен белер өсөн уларҙы уяттыҡ" тип әйтелә сүрәнең 11-12-се аяттарында. Беҙ "Ҡөрьән"де уҡып, уның 10 процентын да аңлай алмайбыҙ, шуға күрә төрлө дин әһелдәренең, ғилем эйәләренең фараздары буйынса ғына фекер йөрөтә алабыҙ. Бәлки, Хоҙай мәмерйәлә йоҡлатҡан ошо кешеләр киләсәктә (ахырызамандан һуң. - **Ә.Ғ.-Ү.**) кешелекте һаҡлар өсөн орлоҡ булараҡ һаҡланалыр? Тимәк, был күҙлектән ҡарағанда, донъялыҡта йәшәгән һәр кем, һәр ҡәүем ошо рәүешле оло һынау үтәләр. "Һуңынан шунда ултырған ваҡыттарын ҡайһы төркөмө яҡшыраҡ иҫәпләгәнен белер өсөн уяттыҡ..." тигән аят тап ошо һынау хаҡында. Әлбиттә, үҙ милләтен яратҡан һәр кем фәҡәт үҙе-

штар яһап, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға өлгәшә алыр ине.

Был хәл бер ғалимдарға ғына түгел, шағирҙарға һәм яҙыусыларға ла ҡағыла. "Шайтандарҙың кемгә төшкәндәрен әйтәйемме һеҙгә? Улар һәр төрлө алдаҡсыға, гонаһлыға килә. Улар аҫтыртын ғына тыңлаған һүҙен һөйләй, ләкин уларҙың күбеһе - алдаҡсы. Ә шағирҙарға аҙашҡан кешеләр эйәрә. Күрмәйһеңме ни уларҙың донъя ҡыҙырып, үҙҙәре эшләй алмағанды һөйләп йөрөгәнен, иман килтереп, изгелек эшләп, Алланы күп иҫкә алғандарынан башҡаһы. Улар йәбер күргәндән һуң ярҙам алды, ә залимдар нисек борғоланырын белер әле!" тиелә "Шағирҙар" сүрәһенең 221-228-се аяттарында. Күрәһегеҙ, бында Аллаһыҙ шағир залимлыҡҡа тиңләнә. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ шағирәләр үҙҙәренең шундай кисереше хаҡында үҙ әҫәрендә бәйән итеп, был кисерештең Аллаһтың һынауы икәнлеген онота, ошо кисереш, тойғо арҡылы ләззәт кисереүе уларҙы гонаһҡа батыра. Ә бит ябай кешеләрҙә лә бар ундай кисереш-

# ТАРАФЫНАН ҠУЙЫЛҒАН ҺЫНАУ,

## икенсе милләткә күсә

ҡорт булып киткән. Тимәк, башҡорт тәүге осорҙа халыҡ, милләт исемен йөрөтмәгән, ә януарҙарға һәм йәнлектәргә баш булған тәүге кеше тигәндә аңлатҡан. Юҡҡа ғына Урал батыр арыҫлан менеп йөрөмәгән бит. Шулай уҡ Уралдың кәләше Һомай - ҡоштар, Айһылыу балыҡтар затынан. Шул уҡ ваҡытта Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ - Әҙәм менән Һауа. Әҙәм менән Һауаның ике малайы Һабил менән Ҡабил булған. Ә Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең улдары Урал менән Шүлгән. Икеһендә лә ике ул араһында дошманлыҡ барлыҡҡа килә. Айырма шунда ғына: Ҡабил менән Һабил бер-береһен үлтерешә, ә Урал батыр Шүлгәндә үлтермәй, аяй.

Мин был донъянан киткәндә лә "Урал батыр" эпосы беҙҙең милләт тураһында яҙылған" тигән инаныу менән китәсәкмен. "Ҡөрьән" бынан мең йыл элек "Урал батыр" эпосынан күпкә һуң яҙылған. Тимәк, кешелек дәүерендә булған ваҡиғалар төрлө сүрәттәрҙә ҡабатланып тора. "Урал батыр" эпосы халҡыбыҙҙың "Ҡөрьән"е кеүек. Эпос та, "Ҡөрьән"дә китапҡа төшкәнсе башта телдә генә һаҡлана. "Урал батыр" эпосына милли һынау "Ҡөрьән"гә ҡарағанда ла оҙаҡҡараҡ һуҙылған, уны Мөхәмәтша Буранғолов 1910 йылда ғына яҙып ала. Үҙенең төп китабын нисәмә мең йылдар күңелендә һаҡлай алған халыҡ мәңгелек ул. Беҙ әле шундай бөйөк ҡомартҡыбыҙҙың ниндәй оло хазинабыҙ икәнен аңлап ҡына бөтмәйбеҙ. Уға әкиәт тип кенә ҡарайбыҙ. Юҡҡа ғына юрматылар шәжәрәһендә тәүге кешенең башҡорт булыуы хаҡында әйтелмәйҙер ул: "Әҙәм ғәләйәссәләм мотлаҡ башҡорт булғандыр. Шул тиклем из-

тә уйлайым. "Юҡ, ғәфләт йоҡоһо йоҡлатыр ине мине, мөғайын, иҫәндер", тигән дә уй килә башҡа.

Был хәл шул килеш ҡалды, бер кемгә лә, хатта иремә лә был хаҡта һөйләмәнем. Улыбыҙ имен-һау әйләнеп ҡайтты. Теге кисерешем хаҡында уға әйткәс, ул: "Булғандыр инде, унда һуғыш - барыһы ла булғандыр", - тиеү менән генә сикләнде. Ғөмүмән, Алик әрмеһе хаҡында беҙгә бер нәмә лә һөйләмәне. Ә бына уҡытыусыһына улем менән бермә-бер осрашып, оло мөғжизә менән иҫән ҡалыуы хаҡында һөйләгән барыбер. Контузияһы ла бар ине уның. Хәҙер шулай уйлайым: теге саҡта мин уянып китеп, бәлки, улымды үлемдән дә һаҡлап ҡалғанмындыр. Кем белә? Бәлки, был башҡортлоҡтор ҙа? Йәнлектәргә хас һиҙеү, тойоу хисе лә бар бит беҙҙә. Әлләҡайҙағы баланың ауазы килеп ишетелгәс, был хәлдә тик йәнлектәргә хас һиҙгерлеккә бәйлән кенә аңлатып булалыр. Тәбиғәт балаһы булған бит башҡорт. Башҡортлоҡ милләт кенә түгел.

### Милләттәр ниңә кәрәк?

Вавилон мәхшәрендә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең телдәрен айыра ла ҡуя. Ни өсөн? Сөнки бер телдә һөйләшеү кешеләрҙе дошманлаштыра башлай. Сөнки кешеләр бер-береһен аңламаһа, дәғүәләшә алмай. Ошонан сығып, ни өсөн Аллаһы Тәғәләнең кешелекте милләттәргә бүлеүен дә аңларға була. Кешеләр бер телдә һөйләшеп, бер ҡәүем булып йәшәгән ностратик дәүерҙә сер ҡалмай башлай һәм артабан ни эшләргә белмәүсе кешеләр араһында яуызлыҡ, дошманлыҡ

теләгән кеше менән бәйләнешкә инә алабыҙ. Сер ҡалманы, Интернетҡа инеп үҙебеҙ теләгән теләһә ниндәй мәғлүмәткә эйә була алабыҙ. Милләттәр араһындағы ғына түгел, хатта дәүләттәр араһындағы сиктәр ҙә шартлы була бара. Был ҡасандыр тарихта булған ата - улды, инәй ҡыҙҙы танымаған хаостың кире әйләнеп ҡайтыу күренеше. Вавилон мәхшәре үҙенә күрә теге замандың ахыры булһа, Интернет дәүере беҙ йәшәгән замандың ахыры булыуы мөмкин. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ниғмәт итеп биргән кешеләрсә мөнәсәбәт, гармония, низам ошо рәүешле боҙола хәҙер. Хоҙай ошо тиклем итеп барлыҡҡа килтергән кешеһен артабан түбәнлеккә төшөрмәҫ, үлтермәҫ, был эшкә ҡыҫылыр әле, тип уйлайым. Кем белә, бәлки, Хоҙай кешелекте юҡ итеп, беҙҙе бөтөнләй икенсе, Интернетты белмәгән ҡәүемдәр менән алмаштырыр.

### Кешелек һынауы

Беҙҙең төбәктә үҙенең башҡортлоғон һаҡлаған ауылдар һыҙат-һыҙат ҡына булып ултырап ҡалған. Улар: Сураҡай, Иҙрис, Ҡаңлы Төркәй, Ҡаранай, Ҡыҙрас, Сапай, Боранғол, Ҡорьятмаҫ, Мәкәш, Ташлы, Ҡармыш, һ.б. Тағы ла шуныһы: көнбайышҡа барған һайын башҡорттар ассимиляцияға нығыраҡ бирелә бара. Артабан Бәләбәй, Йәрмәкәй, Татарстандың Аҡтаныш, Аҙнаҡай яҡтарында йәшәүсе башҡорттарҙың башҡортлоғо ҡан хәтерҙәрендә генә тороп ҡалған.

Ошондай күренеш-хәлдән шундай урынлы һорау тыуа: ни өсөн башҡорттар үҙ асылынан ситләшә һуң? Был күренештең Ҡаҙан йоғонтоһонан тыш, тағы ла ниндәй аңлатмаһы бар? Атаҡлы тарихсы Әнүәр Әсфәндийәровтың тарихи документтарҙан

нең халҡын ошо мәмерйәлә һаҡланған ҡәүем итеп күрергә теләр, бындай ынтылыш тәбиғи ҙа. Әммә мин бында ассимиляцияға бирелгән милләттәштәребеҙ хаҡында фекер йөрөткөм килә. Ысынлап та, һәр ҡәүем үтә Хоҙай һынауын, кемдәрҙер үтә лә алмай ул һынауҙы. Ә башҡортолоҡто һаҡлауға килгәндә, ул милләт һынауы ғына түгел, сөнки алда әйткәнебеҙсә, башҡортлоҡ - милләт кенә түгел, ул кешелек сифаттарын һынауға тиң. Башҡортлоҡ беҙгә Хоҙай тарафынан ҡуйылған һынау һәм шул һынауҙы үтә алмағандар икенсе милләт кешеһе булып китә.

### Шағирҙар ниңә гонаһлы?

"Фән" һүҙе ғәрәп теленән "яһалма", "уйлап сығарылған" тигәнде аңлата. "Фән" тамырынан "фантазия", "фантастика" һүҙҙәре барлыҡҡа килгән. Беҙ фән түгел, ғилем өйрәнеү маҡсатын ҡуйырға бурыслыбыҙ. Әгәр ҙә беҙ мәғарифҡа, сәнғәткә, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә, ғилми фекер үҫешенә фән тип тотонмай, ғилем эше тип ҡараһаҡ, Аллаһы Тәғәлә ошо юлдарҙағы барлыҡ эшмәкәрҙәрҙең ҡәләбен асыр ине. Ошо һүҙ хаҡына, сөнки фән - яһалма төшөнсә, уны кеше уйлап сығарған, ә ғилем - Аллаһы Тәғәләнеке. Шуға күрә лә беҙҙең ғалимдарҙа мин-минлеклек көслө. Улар ғилемде үҙҙәренең асышы тип иғлан итә, йәғни сенсация яһай, имеш. Ә бит хәҡиҡәт бында ябай ғына: кешенең аҡылынан һәм ихтыярынан тыш барған барлыҡ объектив процестар Аллаһы Тәғәләнеке. Беҙҙең ғалимдар Алла һүҙен бөтөнләй белмәй, хатта үҙҙәре өсөн генә булһа ла, ул һүҙҙе ҡулланмай. Әгәр ҙә ғалим кеше быны аңлаһа, Алланы ҡабул итһә, намаҙ уҡыһа, ул тағы ла күберәк ғилми асы-

тәр, тик улар һүҙҙәрҙе рифмалаштырыу һәләте булмағанлыҡтан, был кисерешенә иҙауыты тегә шиғырҙа таба, уны ятлай һәм, әйтергә кәрәк, шағирәнең үҙе кеүек үк гонаһҡа бата. Минеңсә, был сүрәлә һүҙ ошо хаҡта бара. Әгәр ҙә шағир Аллаһы Тәғәләне танымай, тойғоларын ошо рәүешле сәсеп, таратып йөрөй икән, улар милләтенә зыян ғына килтерә. Салауаттың, Бабичтың шиғырҙарын ғына алығыҙ: улар Аллаһы Тәғәләгә дан йырлай бит.

Улай ғына ла түгел, беҙҙә хәҙер милли рух дини рухтан айырылған. Бабичтарҙы, Әхмәтзәки Вәлидиҙәрҙе генә алайыҡ: улар дини тормош менән йәшәгән. Беҙ хәҙер диндән айырылғанбыҙ, шуға күрә лә дәүәтебеҙ ҙә зәғиф. Тап шул арҡала милли мөхитебеҙ киңәйә алмай. Даирәбеҙ тар булғас, әйткән һүҙебеҙ ҙә үҙебеҙҙән ары китмәй, ҙур кимәлгә үтмәй. Элек беҙҙең ауылда Сафа бабай булған. Уның үлгәненә 60 йыл үтһә лә, ауылыбыҙ өлкәндәре һаман да уның һүҙҙәрен һөйләй. Уның һүҙҙәре Аллаһы Тәғәләгә ышанысы менән беҙҙең мөхиткә ныҡытылған. Дин -юл, иман - ҡорал, беҙ уларҙы файҙаланмайбыҙ ғына.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Клара Хәмиҙуллинаның әңгәмәһен уҡығас: "Ниндәй ғалимәбеҙҙе юғалтҡанбыҙ. Әгәр ҙә ул Свердловскиҙа университет тамамлағандан һуң артабан фән, ғилем юлынан киткән булһамы...", тип тә уйлап ҡуяһың. Хәйер... Әгәр ҙә Клара апай ошо юлдан киткән булһа, бер ваҡытта ла юғарылағы фекерҙәрен әйтеү кимәленә күтәрелә алмаҫ ине түгелме икән? Тарихта теләк-шарт һөйкәлеше юҡ шул...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ Егет: "Мансу-ур!" - тигән һаҡ ҡына яғымлы тауышҡа һиҫкәнеп, күҙен асһа, бүлмә уртаһында хур ҡыҙы тора. Эшләп торған телевизор экранынан таралған зәңгәр нур уның буй-һынына һибелгән сәстәренә әкиәти төҫ бирә.***



**8**

Эльза егеттең йоҡоһонда килде. Уны ҡаты йоҡо түгел, ә тәүге серем тиһәң, дөрөҫөрәк булыр. Шулай тип яҙыуын яҙҙым да, йәнә шикләнә төштөм. Сәбәбе - әлеге лә баяғы төпсөр уҡыусы менән бәйләнсек тәнҡитсе. Уларҙың: "Ҡыҙҙың ҡунаҡҡа килерен белгән егет йоҡлап ятырмы? Әҙәм ышанмаҫтайҙы яҙған", - тип әйтеүҙәре ихтимал. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, ысынлап та, бындай осраҡта егет кеше йоҡлау түгел, йәненә тынғы тапмай көтөү ғазабында янырға, тышҡа ҡырҡ сығып, ҡырҡ инергә тейеш. Жанр ҡанундары шуны талап итә. Ләкин ҡайһы саҡта тормошта жанрҙың үҙенә үҙгәрештәр индерерҙәй нескәлектәр осрай.

Ә Мансурҙың яҙатайым серемгә талыуына килһәк, уның да үҙенә күрә сәбәптәре бар. Беренсенән, ул Эльзаның ҡунаҡҡа киләм тигән хәбәрен ысынға алманы - шаярта, тип уйланы. Ҡашыҡҡа һалып ҡына йоторлоҡ һылыуға ни бысағыма кәрәк ул? Шундай сибәр быға тиклем йәрһеҙ буламы ни - ҡырылмаһа ҡырҡ егете барҙыр әле. Икенсенән, өс-дүрт көн аттан төшмәй йөрөүҙән талсығыуы ла бар, сөнки ул, нисәмә йылдар эшһеҙ ятып, яман өйрәнгән. Өсөнсөнән, бынан алдағы төндә егеттең йоҡлай алмай аҙапланыуын хәтерләйһегеҙҙер. Өҫтәүенә, ваҡыт та һуң - был мәлдә төн ҡараһы тамам ҡуйырып, ил аяғы һил булғайны.

Егет: "Мансу-ур!" - тигән һаҡ ҡына яғымлы тауышҡа һиҫкәнеп, күҙен асһа, бүлмә уртаһында хур ҡыҙы тора. Эшләп торған телевизор экранынан таралған зәңгәр нур уның буй-һынына, яурынына һибелгән сәстәренә әкиәти төҫ бирә. Мансур тәүҙә йоҡо аралаш, ҡыҙҙы төштә күрәм икән, тип уйланы, ә инде был мөғжизәүи мәлдең өн икәне зиһененә барып еткәс, ятҡан еренән һикереп торҙо:

- Ә-ә, был һинме ни?.. Ҡалай серем ебәреп, баҫып киләһең...

- Күрәһең, бүреләргә затлығым барҙыр, - тип шаяртты Эльза. - Йә, сәйең ҡайнанымы?

- Сәй ни, хәҙер... - Мансур өтәләнеп барып өйөндәге Ильич лампочкаһын ҡабыҙып ебәрҙе, баяғы совет дәүеренән ҡомартҡы булып ҡалған электр плиткәһен розеткаға тоташтырҙы. Уның өҫтөндәге күпте күргән сәйнүк: "Мине күпме яфаларға була-а?" - тигәндәй, нәҙек кенә тауыш менән ярым сеңләп, ярым ыңғырашып, үҙенә йөкмәтелгән бурысты атҡарырға кереште.

Ҡунаҡ күстәнәсһеҙ булмай, шулай ҙа, Эльзаның пакетынан бер-бер артлы сығып, өҫтәлгә теҙелгән ауҡат "һый" тигән төшөнсәгә күберәк тап килә ине. Һыйҙың да ниндәйе бит әле: ыҫланған затлы балыҡ киҫәктәре, ыҡсым банкаларҙағы ыуылдырыҡ, ыҫланған тауыҡ ите, ҡиммәтле колбасалар, төрлө сит ил емештәре, этикеткаһына биш йондоҙ төшөрөлгән әрмән коньягы. Ҡыҫҡаһы, плиткә өҫтөндәге сәйнүктең тауышы сеңләүҙән өҙләүгә күсеп тә өлгөрмәне - Мансурҙың стенаға терәтеп ҡуйылған ҙур булмаған өҫтәле быҒаса күрелмәгән ниғмәт менән тулды ла ҡуйҙы. Унда ҡалһа тик ике рюмка һыйырлыҡ ҡына урын ҡалғандыр.

Ошо ерҙә төпсөр уҡыусы менән бәйләнсек тәнҡитсе, ҡулдарын ыуа-ыуа, тамшанып ҡуйырға тейеш. Юҡ, өҫтәлгә теҙелгән затлы ризыҡтарҙы күҙ алдына килтереүҙән түгел, ә ҡыҙ менән егет араһында буласаҡ артабанғы ваҡиғаларҙы тиҙҙән кисереү ләззәтенән. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең ҡайһы бер яҙыусылар, ғишыҡ-мишыҡ мәлдәрен тәмләп, тәфсилләп һүрәтләп, уларҙы яман өйрәтеп бөткән. Ундай әҙиптәр эротиканы тасуирлаған саҡта, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән образға инеп китеп, шул хәтле ҡуҙғый һәм илһамлана ки, хатта прозаиктан шағирға әүерелә. Һәм, һөҙөмтә булараҡ, әҫәрҙәренең бындай өлөштәре улар ижадының иң юғары ҡаҙанышы һаналып, таш эргәһендәге ынйы бөртөктәре төҫлө ылыҡтырып, иғтибарҙы үҙҙәренә тартып тора. Аҙым һайын енси ҡаһарманлыҡ рухында кәүҙәләндерелгән ундай геройҙар илдәге дөйөм дәртһеҙлек һәм демографик төшөнкөлөк фонында йәш быуынға һәйбәт өлгө булып хеҙмәт итә. Тап шундай әҫәрҙәрҙең дәүләт премияһына тәҡдим ителеүе лә беҙҙең фекергә ҡеүәт.

Ижадтары юғары премиялар, дәрәжәле исемдәр менән билдәләнгән әлеге олпат яҙыусыларҙың әҙәбиәттә үҙенә күрә эталон булып торған әҫәрҙәренә тиңләшә алмаған хәлдә лә, һис юғы уларға ынтылырға тейешбеҙ ҙә, ләкин тормошто эротик яҫылыҡта күреү һәләте һәр кемгә бирелмәй. Шуға күрә, тәрән үкенескә ҡаршы, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең өмөттәрен аҡлап булмай инде. Нишләтәһең - бары менән байрам. Дөрөҫ, Эльза менән Мансурҙың да хушлашыу табындары, баяғы олпат яҙыусылар күҙлегенән ҡарағанда, әҙәмсә башланып китте. Әйҙәгеҙ, уларҙың һөйләшкәндәрен һыңар ҡолаҡ менән генә тыңлап ҡарайыҡ, сөнки күҙәтеп тороу уңайһыҙ - ҡыҙ менән егет булған ерҙә ҡалғандар һәр саҡ артыҡ...

- Мансур, һин, джентльмен булараҡ, коньяк һал, ә мин сәй яһармын. - Был тауыш Эльзаныҡы икәне аңлашыла.

- Ярар, улай булғас. Нимә өсөн эсәбеҙ һуң? - ти Мансур, бер аҙ тынып торғандан һуң. Һиҙемләүегеҙсә, пауза - уның рюмкаларҙы затлы эсемлек менән тултырған ваҡыты.

- Әйҙә, эштең уңышлы тамамланыуы өсөн!

Артабан рюмкалар сәкәшкән, сәп-сәп итеп ризыҡ көйшәгән, шабырлатып сәй эсә башлаған ауаздар яңғырай, тик уларҙы ҡарап тороп һүрәтләмәгәс, былай ғына килештереүе ҡыйын. Бер аҙҙан йәнә Эльзаның тауышы ишетелә:

- Ой, мин бит онотоп ултырам - бына, һеҙҙең эш хаҡығыҙ!

Уға "джентльмен" яртылаш тауыш менән яуаплай. Тауышын йәлләп кенә сығарғанға күрә асыҡ ишетелмәй, бары тик уның:

- Һәй, уны ни... ана, Заһитҡа... ҡулдан булһа ла машина алырға хыяллана ине, - тип мөңгөрҙәгәне генә ҡолаҡҡа салына.

- Улайһа, үҙең бирерһең. Беҙ иртә таңдан ҡуҙғалабыҙ, - ти Эльза.

Бынан һуң бер аҙға тынлыҡ урынлашты. Күрмәгәс, ни эшләгәндәрен әйтеп булмай, шулай ҙа был ваҡытты улар өҫтәлдәге һый-хөрмәттән ауыҙ итеүгә бағышлағандарҙыр, тип фараз итергә була. Бәлки, анау затлы эсемлекте тағы бер-ике мәртәбә тәмләгәндәрҙер. Эльзаны белмәйем, ләкин Мансур әүәҫ инде уға. Сеү, туҡтағыҙ әле, егетебеҙ һаҡ ҡына тамаҡ ҡыра түгелме? Нәғеҙ шулай! Ә Мансурҙың тамаҡ ҡырыуы уның уңайһыҙланыуын белгертә. Ҡыҙыҡ, нимәгә албырғап ҡалды икән? Бәлки, Эльзаның бынау һүҙҙәре хәлгә асыҡлыҡ индерер:

- Аңлайым, Мансур... Ҡыҙ кеше тойғоларын беренсе булып белдерергә тейеш түгел. Тик һин дә аңла: миңә ныҡ оҡшайһың...

Быға ҡаршы егет ниҙер мығырҙай, тик уның бер һүҙен дә аңларлыҡ түгел. Ҡысҡырыңҡырап әйтһә ни була икән, йүнһеҙ. Эльза дауам итә. Уның өҙөк-һурыҡ хәбәренән тулҡынланғаны һиҙелеп тора:

- Мин кино төшөрөрҙән алда... башҡорт аттары тураһында күп материал уҡып сыҡтым. Береһе ныҡ хәтерҙә... Имеш, бейә, айғырға ятырҙан алда... буласаҡ ҡолононоң атаһын төшөндә күрә лә, уны барып тапҡансы саба...

Ошо ерҙә Мансур һүҙ ҡыҫтыра. Был юлы уның:

- Һин бейә түгел дә... - тип бупылдағанын аңғарырға мөмкин ине. Шул да булдымы һүҙ? Йән көйөгө!

- Әлбиттә! - ти Эльза. - Тик һүҙ ул турала түгел, Мансур! Европала был ғәҙәти хәл: ҡыҙҙар үҙ тойғоларын асыҡтан-асыҡ, ирекле рәүештә белдерә ала...

Ә Мансур:




- Был Германия түгел, - тип һаман киреләнеүен белә. Һай, тиҫкәре! Керәшен!

Эльзаның тауышында инде ялбарыу өндәре сағыла:

- Мин һиңә саҡ ҡына ла оҡшамайыммы ни?..

Ниһайәт, Мансурҙың ауыҙынан да:

- Оҡшауын оҡшайһың да ул, - тигән йүнле һүҙ сыға.

- Һуң, шулай булғас? - тип өҙөлә Эльза. - Артығын һорамайым - бер генә төн бүләк ит миңә!..

Бынан һуң байтаҡҡа һуҙылған тынлыҡ урынлаша. Күреп торғанда, ҡана һуң: ни менән мәшғүл булғандарын тот та һүрәтлә. Ә былай тик фараз итергә ҡала. Шымышыуҙарына ҡарағанда, ауыҙҙары буш түгел һымаҡ. Ә ауыҙ ҡасан бушамай? Дөрөҫ - йә ашағанда, йә үбешкәндә. Миненсә, бөгөнгө осраҡҡа һуңғы фараз тап килә. Белмәйем, бәлки, яңылышамдыр.

Бына, Эльзаның үкенес тулы ыңғырашыуы яңғырай. Уның артынса ҡыҙҙың:

- Тимәк, мин һиңә ысынлап та оҡшамайым!... Ҡайһы ерем яратмаҫлыҡ һуң? - тип иламһырауы ҡолаҡҡа салына.

Мансур, йүнһеҙ, уны һаман йыуатып маташҡан була:

- Юҡ, юҡ, улай түгел! Һин бик һәйбәт, бик матур...

Һуң, шулай булғас! Тағы атаңдың башы кәрәкме һиңә? Ана, Эльза ла беҙҙең фекерҙе ҡеүәтләй:

- Улайһа, нишләп һуң?.. Нишләп?..

Мансурҙың ауыр көрһөнгәне ишетелә - ҡыҙҙың һорауы бик еңелдән түгелдер, ахырыһы. Ана, һөйләгән хәбәренең урыҡ-һурыҡ булыуы ла уның эске тулҡынланыуына ишара:

- Эш һиндә түгел, Эльза... Нисек аңлатайым?... Ну, мин ҡатын-ҡыҙҙы яратыуҙан мәхрүммен, тип әйтәйемме...

Ҡыҙҙың түҙемһеҙләнеп уны бүлдергәне ишетелә:

- Нисек инде - мәхрүм?

- Ну, тураһын әйткәндә... уларҙың теләген ҡәнәғәтләндерә алмайым.

- Ниңә улай, Мансур? Тыумыштанмы ни?

Егет йәнә көрһөнөп ҡуя. Күрәһең, хурлығының сәбәбен аңлатыуы ла бик ауыр уға. Тимәк, беҙ егетте юҡҡа әрләгәнбеҙ. Ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң, кешенең күңелендә ниндәй серҙәр ятҡанын кем белә? Беҙ бит Аллаһы Тәғәлә түгел. Туҡта, Мансурҙы тыңлайыҡ:

- Мин быны бер кемгә лә һөйләгәнем юҡ - һин беренсе... Тыумыштан түгел шул... Армияға тиклем һин дә мин ине... Чернобыль касафаты был. Унда авария булғанда демобилизацияға ярты йыл ҡалғайны... Шул инде: часть командиры саҡыртып алды ла, мөҙҙәтенән алда дембель вәғәҙә итеп, әүрәтеп, һәләкәт эҙемтәләрен юҡҡа сығарырға Чернобылгә ебәрҙе... Ә приказға буйһонмай ҡара!.. Шул, киттек инде. Командала күбеһе әлеге лә баяғы ҡара халыҡ - башҡорт та татар, тигәндәй... Барыһы менән дә тигәндәй хәбәрләшеп торам - уларҙа ла шул уҡ кәмселек. Шулайтып, һәләкәт эҙемтәләре үҙебеҙҙе юҡҡа сығарҙы...

Тағы Эльзаның өҙәләнгән тауышы яңғырай. Уның баштағы бер нисә һүҙен абайламай ҡалдым: әллә ғәфү үтенде, әллә Алланы телгә алды. Бәлки, үҙенең күңел торошон белдереп, туған телендә берәй һүҙ ысҡындырғандыр. Хәбәренең айышы бары тик:

- ... мин бит белмәнем, - тигән ерҙән ялғанып китә. - Мансур, миңә асыуланма, йәме.

- Уның нимәһенә асыуланаһың?

- Ә мин һиңә бер күреүҙә ғашиҡ булдым. Үҙең миңә иғтибар итерһең, тип көткәйнем...

- Була торған хәл.

Бер аҙ тын торғандан һуң, Эльза дауам итә:

- Мин алйот, эйеме?

- Нишләп?

- Йәнәһе, һинән ауырға ҡалам да, бала табам. Ул мотлаҡ малай була. Мин уны, өләсәйемдең һуңғы төйәгенең төҫө итеп, тәрбиәләп үҫтерәм...

Мансур йәнә бер көрһөнә лә:

- Матур хыял, - ти.

- Матур һәм тормошҡа ашмаҫ хыял, - тип өҫтәй Эльза. - Ҡара әле, Мансур, бәлки, һин Германияға килерһең? Ҡайтҡас та саҡырыу ебәрер инем.

- Германия? - тип ғәжәпләнә егет. - Мин унда нишләп йөрөйөм?

- Бәлки, дауалап булыр. Беҙҙә - донъялағы иң яҡшы медицина. Юл хаҡы һәм башҡа расходтары өсөн ҡайғырма...

Әммә Мансурҙың:

- Юҡ! Уныһы булмаҫ инде! - тигән ҡәтғи яуабы ҡыҙҙың был тәҡдимен ярты һүҙҙә бүлдерә. Унан бүтән төрлө хәбәр ишетеүе лә ситен булыр ине, әлбиттә. Мансур һымаҡ тиҫкәре, үжәт әҙәмдәр хаҡында: "Ыңғайға йөрөһә, исеме юғалыр", - ти халыҡ.

Мансурҙы ла аңларға була: уның өсөн меҫкенлек - үлемгә бәрәбәр. Бахыр хәленә төшөп, кеше көнлө булып йәшәүгә ҡарағанда, донъянан юйылыуың артыҡ. Ә уның был көндәрҙә кисергәндәре иһә һәләкәт түгел, ә ҡайнап торған тормоштоң үҙе. Ә тормошта барыһы ла була - Чубайстары ла, Чернобыле лә, башҡаһы ла, тигәндәй.

Инде Мансурҙың ҡыҙға ҡайтарған ҡырҡа-яран яуабын ишеткәс, беҙгә лә артабан тыңлап тороуҙың мәғәнәһе ҡалманы: егет барыбер үҙ һүҙенән ҡайтмаясаҡ. Тимәк, әллә ни ҙур әһәмиәткә эйә булырҙай ваҡиғалар ҙа көтөлмәй. Геройҙарҙың артабанғы яҙмыштарына килгәндә, Эльза имен-аман ҡайтып етер, ниәт иткән кинофильмын монтажлап бөтөр. Ул, моғайын, уңышлы килеп сығыр һәм ҡыҙҙың туған-тыумасалары араһында ғына түгел, ә киң йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыр. Хатта Эльзаның был фильмы Халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнашып, призлы урындар яулауы, миҙалдар менән билдәләнеүе ихтимал.

Мансур ҙа йылдар буйы күнегелгән ҡәҙимге тормош менән йәшәй башлар: туйғансы телевизор ҡарар, Заһит менән әсе теллелектә ярышыр. Ауылда эш тә етерлек - әле бесән өҫтө. Унан һуң утын, ҡар яуып, һыуыҡ төшһә - һуғым. Мансур ауылдаштарына ошо хужалыҡ эштәрен атҡарырға ярҙамлашыр. Ҡайһы саҡта уның хәтеренә өңгә лә, төшкә лә оҡшаған йәйге ваҡиғалар килеп төшөр. Күҙ алдына берсә тау-таш араһында йүгереп йөрөгән, берсә баҫҡан урынында бала һымаҡ һикергеләп торған Эльза килеп баҫыр. Мансур уның менән хушлашыу төнөн дә өр-яңынан кисерер һәм ауыр көрһөнөп ҡуйыр.

**(Аҙағы).**

*ИЖАДХАНА*

# ҺӘР ЗАМАНДЫҢ...

## үҙ Бабичтары була

**Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына тәҡдим ителеүселәрҙең бер нисәүһенә ике һорау менән мөрәжәғәт иттек:**

- **Хәҙерге йәштәргә Бабичтың ниндәй сифаттары етешмәй?**
- **Үҙеңде был премияға лайыҡлы тип уйлайһыңмы?**

**Альберт ИМАМЕТДИНОВ, БР Өфө дәүләт ҡурсаҡ театры режиссеры:**



● Шәйехзада Бабич арҙаҡлы милләттәштәребеҙ араһында мөһим урын алып торған шәхестәребеҙҙең береһе. Әхмәтзәки Вәлиди, Салауат Юлаев кеүек үк, Бабич та халҡы өсөн йәнен дә аямаған, йәшләй генә иҫ киткес идеялар менән янып йәшәгән һәм ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә әллә күпме эштәр башҡарып өлгөргән. Сәйәси эшмәкәр ҙа, ялҡынлы шағир ҙа булған Бабичтан беҙгә өлгө алырға кәрәк. Бөгөнгө заман йәштәре араһында ла уңышлы, һәләтле, тормошон үҙе теләгәнсә ҡороп йәшәүселәр күп. Бигерәк тә бөгөн баш ҡала йәштәре ниндәйҙер рух күтәренкелеге кисерә, төрлө саралар ойоштора, үҙ-ара таныша, тимәк, бер ҡорға туплана. Тимәк, икенсерәк сифатта һәм халәттә булһа ла, һәр замандың үҙ Бабичы, үҙ Әхмәтзәкие, үҙ Салауаты була, уларҙы күрә һәм баһалай белергә генә кәрәк.

● Зирәк күңелле халҡым ижадында, "ятып ҡалғансы атып ҡал", тигән тапҡыр һүҙ бар. Әле йәшмен, тәжрибәм самалы, тип бындай оло бәйгелә ҡатнашыуҙан баш тартыу дөрөҫ булмаҫ ине. Эшләгән эшеңә үҙ мөләңдә баһа алғанда ғына артабан үҫеү мөмкинлеге була. Был конкурстың әһәмиәте лә шунда: һин үҙеңде тағы ла ҙурыраҡ, мөһимерәк эштәргә көйләйһең, күңелдә морон төртөп йөрөгән уйҙарыңды тормошҡа ашырыу өсөн дәрт алаһың.

Премияға Зөһрә Бураҡаеваның "Рух иле" пьесаһын сәхнәләштергәнем өсөн тәҡдим ителдем. Ҡурсаҡ театрының мөмкинлектәрен ҡулланып, балаларға батырҙарыбыҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ тураһында һөйләгән спектакль ҡуйырға күптән хыяллана инем, ижадташ дуҫтарым ярҙамында быны атҡарып сығалдыҡ һәм был эшемдән оло ҡәнәғәтлек тойғолары кисерҙем. "Алтылағы - алтмышта", бала үҙ милләтенең батырҙарын белеп үҫергә, улар менән ғорурланырға, уларға оҡшарға тырышырға тейеш. Космик тиҙлек менән үҫешкән заманда сит ил йәнһүрәттәре геройҙары баланың аңын томаламаһын, сөнки ул баланың киләсәге тап бөгөн башлана. "Рух иле" спектакленең төп идеяһы ла ошо фекерҙе дауам итә: Аждаһаның ҡара юлынан китәһеңме, әллә Рух иленең фатихаһы менән йәшәйәсәкһеңме - үҙ юлын һәр бала үҙе һайлап ала. Шуға балаларыбыҙ рухлы, аңлы булып үҫһен, милли сәнғәтебеҙҙең бишеге һаналған Өфө дәүләт ҡурсаҡ театрына йөрөһөн. Беҙ иһә, үҙ сиратыбыҙҙа, уларҙың күңелдәрен өшөтмәй, бишектә тибрәтеп кенә үҫтерерлек тамашалар ҡуйып торорбоҙ.

**Артур ҠУНАҠБАЕВ, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры:**



● Бөгөнгө йәштәргә Бабич кеүек шәхестәрҙә булған рух көсө етеңкерәмәйҙер, тип уйлайым. Ҡыҙғаныска күрә, күптәр Бабичтың эшмәкәрлеге, быуаттар шаңдауы булып яңғыраған ижады менән дә яҡындан таныш түгел. Йәш быуынға һәр яҡлап өлгө булырҙай шәхестәребеҙ хыялланған дәүләтебеҙ, телебеҙ бар, әммә ни өсөндөр күңелдәребеҙҙә башҡортлоҡ рухы һүлпәнерәк. Һуңғы осорҙа уйнаған ролдәремдең береһе - Әхмәтзәки Вәлиди инҡилаб заманында ла үҙ милләтен һаҡлап ҡалырға ынтылған, тыуған иленән сығып киткәс тә башҡортлоғон онотмаған. Көсләү, әммә хис-тойғоларға бай, йомшаҡ күңелле Әхмәтзәки ниндәй генә ауыр мәлдәрҙә лә ҡулын һәлендермәгән, алға барған, телдәр өйрәнгән, ғилми китаптар яҙған. Бына кемдәр беҙгә бөгөн өлгө булып торорға тейеш.

● Ижад кешеһенә, ул ҡайһы ғына өлкәлә хеҙмәт итеүенә ҡарамаҫтан, төп баһаны халыҡ бирә. Республиканың төп театры сәхнәһендә уйнай башлауыма әле күп ваҡыт та үтмәгән. Үҙемдән ҡәнәғәт булған саҡтарым да, киреһенсә, роль өҫтөндә эшләгәндә нимәнелер уйлап еткермәү һөҙөмтәһендә ҡәнәғәтһеҙлек тойғолары кисергән мәлдәрем дә була. Ғөмүмән, актер, йырсы, яҙыусы һәм һөнәре ниндәйҙер кимәлдә ижад тигән өлкә менән бәйле булған кеше һәр ваҡыт эҙләнеү өҫтөндә булырға тейештер ул, юғиһә, ижад шишмәһенең саф һыулы инештән батҡыл һаҙлыҡҡа әүерелеүе ихтимал. Шунан Уңыш ғәли йәнәптәренең дә һине дуҫ итеп һайлауы мөһим. Йәш кенә көйөмә үтә лә яуаплы ролдә - Әхмәтзәки Вәлидиҙе уйнау бәхете тейеүен, тамашасының минең геройымды ихлас ҡабул итеүен дә оло уңыш тип ҡабул итәм һәм яҙмышыма яҙған хеҙмәттәштәрем, дуҫтарым, тамашасым өсөн рәхмәтлемен. Был роль миңә күңел үҫеше бирҙе, үҙемә ышанысымды арттырҙы, рухымды нығытты. Һәр башҡорт өсөн ҡәҙерле булған тағы бер бөйөк шәхесебеҙ исемендәге премияға лайыҡ булыу ижад киңлектәрен байҡап осоу өсөн ҡанаттарымды нығытасаҡ ҡына, тип уйлайым.

**Искәндәр ҒАФАРОВ, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының III курс студенты:**



● Заманалар үҙгәргән һайын, кешеләр ҙә үҙгәрә. Бабич йәшәгән осорҙа бер сифаттар өҫтөнөрәк һаналһа, хәҙерге заманда үҙеңде шәхес булараҡ күтәреү, юғалып ҡалмау өсөн бөтөнләй икенсе сифаттар мөһим. Шулай ҙа һәр быуатта ла ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү, дан яулау өсөн үтә тырыш һәм гел хәрәкәттә булырға кәрәк. Мәҫәлән, профессиональ музыкала һәр ваҡыт үҙ өҫтөңдә эшләргә, ныҡышмал булырға, ихтыяр көсө тәрбиәләргә тура килә. Һигеҙәр сәғәт буйына фортепиано артында ултырған мәлдәр була, сөнки профессиональ музыкант өсөн тиҙ яуланған билдәлелектән бигерәк, сифатлы башҡарыу осталығына өлгәшеү мөһим. Тағы ла йәш кешегә үҙенең тамырҙарын онотмау ҙа мөһим. Минең сәнғәтте һөйөүем, ижади һәләттәрем атай-олатайҙарымдан килә. Күберәк классик көйҙәр уйнарға тура килһә лә, уның нигеҙендә ике яҡлап нәҫел ебемдән күсә килгән халыҡсанлыҡ ята. Тап ошо миңә көс-дәрт биреп кенә ҡалмай, енеүҙәргә лә әйҙәй. Композиторҙарыбыҙ араһында фольклорға мөрәжәғәт итеп, халыҡсанлыҡ төшөнсәһен иҫтән сығармай, матур башҡорт көйҙәрен ижад итеүселәр етерлек. Әйтергә кәрәк, юғары сәнғәтте аңлаған сит ил музыка һөйөүселәре башҡорт музыкаһын бик яҡшы ҡабул итә.

● Мин профессиональ музыка менән бик бәләкәй саҡтан шөғөлләнәм. Ошо ваҡыт эсендә сит илдәргә, Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында уҙғарылған конкурстарҙа ҡатнашып, еңеүсе исемдәрен яулағаным бар. Әлегә тиклемге иң ҙур еңеүем - былтыр Парижда үткән Александр Скрябин исемендәге X Халыҡ-ара пианистар конкурсында беренсе премияға лайыҡ булыуым. Сит илгә сыҡҡан һайын Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Урал Иҙелбаев кеүек башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәрен уйнайым. Ә башҡорт халыҡ көйҙәренә килгәндә, уларҙың фортепиано өсөн уңышлы эшкәртелгәндәре бик күп түгел. Шулай ҙа киләсәктә был көйҙәрҙе башҡарырға хыялланам. Сит ерҙә һинең ижадыңа бирелгән баһа - бер, ә үҙ республикаңда һине таныуҙары бөтөнләй икенсе тойғолар кисерергә мәжбүр итә икән. Шуға ла был премияға тәҡдим ителеүем минең өсөн иң юғары баһа, еңеүҙәремдә үҙемдең, ата-әсәйемдең, уҡытыусым Рөстәм Шәйхетдиновтың да өлөшө ҙур һәм был премия уларҙың тәрбиәсе талантына бирелгән баһа булыр ине, тип уйлайым.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*КИТАБЕННАС*

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**188**
Ике иптәш ихлас уйҙан
Ултырһа мәжлес ҡороп,
Аллаһы Тәғәлә үҙе
Был ҡорҙо һаҡлап торор.

**189**
Яҡла илдең ике көсһөҙ халҡын:
Етем хаҡын, ҡатын-ҡыҙҙар хаҡын.

**190**
Төшөндә лә күрмәгәнде
Күрҙем тигән гонаһ ҡылыр.
Ул бәндәнең әйткән һүҙе
Ялғандың да ялғаны ыр.

**191**
Кем ҡайғыларҙан таушалған,
Өҙгөләнгән, тауышланған -
Уның янында мин ҡалмам.

**192**
Айырылышыу - хата, аймылышыу,
Кеше менән татыу, дуҫ йәшә.
Яңғыҙҙарға шайтан эйәләшә,
Күмәктәрҙән иблис ситләшә.

**193**
Нимә өҫтөн ураҙанан,
Намаҙҙан, саҙаҡанан?
Яуабым шул:
Ике кеше
Боҙолошҡанда тамам,
Шул ике кеше араһын
Көйләүҙән ҙур эш юҡ та,
Сөнки ара боҙоҡлоғо
Аралағы бейек тау.

**194**
Ерҙә мәсет төҙөүселәргә
Йәннәттә йорт төҙөп ҡуйылыр.

**195**
Әгәр юлға сыҡһаң
Ғилем өйрәнергә,
Еңеләйер юлың
Йәннәткә инергә.

**196**
Күңелен ғилемгә һалған -
Бәйғәмбәрҙән мираҫ алған.

**197**
Мәғлүм булһын барығыҙға;
Шулар насар арағыҙҙа:
Өйләнмәй йөрөгән егеттәр,
Кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар.

**198**
Ғәләм алдында Алланан
Оялмаған бер бәндә
Мәңге оялмаҫ Алланан
Кешеләр күрмәгәндә.

**199**
Йә һүҙеңдә булһын мәғәнә,
Йә өндәшмә бөтөнләйгә!

**200**
Һанламайҙыр нинә кеше
Ике байлыҡ, ике ҡотон:
Бәҫен белмәй һаулығының,
Ҡәҙерләмәй буш ваҡытын?

**201**
Ғашиҡ булып, намыҫын һаҡлап,
Йәнен кем ҡорбан иткән,
Ундайҙар тиң иман өсөн
Ҡорбан булған шәһиткә.

(Дауамы бар).

*✓ Ә бит гигиена ҡағиҙәләре бик ябай: уҡығанда китапты күҙҙәрҙән 30 см арала тоторға; компьютерҙа эшләгәндә һәр 45 минут һайын ял итеп алырға, ә иң яҡшыһы күҙҙәр өсөн махсус күнегеүҙәр яһарға.*



## ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠОҢ КИЛҺӘ...

## көндөҙ ҙә йоҡлап ал

■ Италия ғалимдары кеше ғашиҡ булғанда кисергән тойғоларҙы кисерергә мәжбүр итеүсе матдәләр барлығын асыҡлаған. Улар 58 ғашиҡты тикшереп, уларҙың барыһының да ҡанында нервылар үҫеше факторы концентрацияһының артыуын билдәләгән. Был аҡһым нервы күҙәнәктәренең үҫешендә ҡатнаша һәм уларҙың йәшәү эшмәкәрлеген һаҡлай. Никахта оҙай торғандарҙың ҡанындағы был фактор юғары түгел. Ғалимдар күҙәтеүенсә, ғашиҡтарҙың ҡанындағы баяғы юғары концентрация бер йылдан артыҡ бармай. Ярһып-шашып һөйөүҙең ғүмере шулай ҡыҫҡа икән.

■ Өлкәнәйгәс тә мускулдарың ныҡ булыуын теләһәң, ит аша, тип кәңәш итә француз ғалимдары. Ҡомаҡтар менән үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, леуцин аминокислотаһы синтез балансы һәм мускулатура туҡымаһы тарҡалыуҙан һаҡлай. Леуциндың төп сығанағы - ит, шунлыҡтан диетологтар өлкәндәргә вегетариандар диетаһынан баш тартып, күберәк ит ашарға ҡуша.

■ АҠШ-тың Космик биомедицина милли институты психологы Дэвид Динджес сәләмәтлеге яҡшы булған 90 йәш ир-егет менән эксперимент үткәреп ҡараған. Улар ике аҙна буйы төнгө йоҡоларын 4-8 сәғәткә кәметеп, көндөҙ 15 минуттан ике сәғәткә тиклем йоҡлап алған. Уяу ваҡыттарында белгестәр улар менән төрлө һынауҙар үткәргән. Һөҙөмтәлә шул асыҡланған: үҙенде көнө буйы яҡшы тойоу өсөн төнөн 4 сәғәт кенә йоҡларға һәм көн уртаһында бер аҙ йоҡлап алыу кәрәк икән. Шуға ла көндөҙ 10 минут тирәһе йоҡлап алыу фарыҙ, ти ғалимдар. Мәҫәлән, бер аҙ серем итеп алған студент мәғлүмәттәрҙе иртәнге ваҡыттағы кеүек яҡшы үҙләштерә. Тик көндөҙгө йоҡо 1 сәғәттән артып китмәҫкә тейеш.

■ Фитнес клубтарына ҡатын-ҡыҙҙар күберәк йөрөһә лә, спорт менән шөғөлләнеүҙең файҙаһы әҙерәк тейә икән. 16 мең ҡатын-ҡыҙ һәм 11 мең ярым ир-егет араһында тикшереүҙәр үткәреп, Америка һәм Греция ғалимдары шундай һығымтаға килгән. Баҡтиһәң, нәфис зат күпме генә диетала ултырып, спортзалдар буйлап йүгермәһен, үҙенең формаларын үҙгәртеүгә өлгәшә алмаҫаҡ. Ә көслө затҡа физик күнекмәләр 100 процентҡа тиерлек йоғонто яһай. Бынан тыш, спорт менән шөғөлләнеү һәм диета һаҡлау ирҙәрҙе йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, 2-се типтағы диабет һәм инсульт ауырыуҙарынан да һаҡлай икән.

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан көнө-төнө рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала маҡталған ысынбарлыҡҡа тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай, тик уларҙан ниндәйҙер дауалау һөҙөмтәһе көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций күп, ул артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Районтарҙа хәлдәр нисектер, мәгәр Өфө ҡала поликлиникаларында күҙ врачына эләгеүе ауыр мәсьәлә. Табипҡа алдан яҙылыу системаһы ла әллә ни хәлде ҡотҡармай. Ҡабул итеүгә 2-3 аҙна алдан яҙылып, сәғәтеминутына килеп етһәң дә әллә күпме көтөп ултырырға тура килә, сөнки бөтә ергә сиратһыҙ үтеүсе ауырлы ҡатындар, инвалидтар, операциянан һуң күренергә килеүселәр, тулаүле медосмотр үтеүселәрҙән параллель рәүештә тағы бер сират хасил була. Шунлыҡтан, табип ишеге төбөндә ығы-зығы, талаш, этеш-төртөш башлана. Ошондай йәмһеҙ күренештәрҙән йүнкеп, һуңғы ваҡыт ҡом тулғандай төйөлөп, күҙҙәр ауыртып йонсоһа ла, офтальмологҡа бармай йөрөгән мәлдә бер хәбәр ишетелде: Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында тиҙҙән буласаҡ халыҡ-ара симпозиум айҡанлы ҡабул итеүҙәр ойошторолған икән. Паспорт менән полистан тыш, йүнәлтмә лә, алдан яҙылып тороу ҙа кәрәкмәй, ти. Һәм, ысынлап та, регистратурала миңә тәүҙә 210-сы, унан 214-се кабинетҡа инергә тип, тиҙ генә талон тултырып та**



**тотторҙолар. Бына бит, көтмәгәндә ниндәй уңай тура килде, тип ҡыуана-ҡыуана тәүге кабинет янына килһәм, йығылып китә яҙҙым: сиратта иллеләгән кеше көтөп ултыра. Сират алып, ҡайҙалыр йомоштары менән киткәндәрҙе лә ҡушһаң, был кабинет ишеге төбөнә бөгөн генә барып етеүгә ышаныс аҙ. Шуға күрә күҙ алдында юҡҡа сыҡҡан был ниәткә ҡул һелтәп, иң мөһиме, редакция заданиеһын үтәп ҡайтырға булдым. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының баш табибы Зөләйха МӘРҮӘНОВА менән әңгәмә әлеге халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция хаҡында башланып китте лә инде.**

# КҮҘ НУРҘАРЫБЫҘ ҘА...

## күҙ ҡараһылай һаҡлауға мохтаж

**▸ Зөләйха Рәмил ҡыҙы, офтальмохирургия буйынса Өфөлә үткәрелгән симпозиум, уның программа йүнәлештәре, маҡсаты хаҡында әйтеп китһәгеҙ ине?**

- Күҙҙәрҙең мөгөҙ ҡатламы хирургияһы буйынса халыҡ-ара "Көнсығыш-Көнбайыш" ғилми-ғәмәли конференцияның эш программаһы бик ҙур булды, ул күп төрлө йүнәлештәрҙе ҡараны. Тәүге көн глаукоманы диагностикалау һәм дауалау, күреү органдарының шешенеү сирҙәре, һәр төрлө йәрәхәтләнеүҙән дауалау, күҙҙәрҙең мөгөҙ ҡатламы ауырыуҙары тикшерелһә, икенсе көнөнә катаракта хирургияһы һәм балалар офтальмологияһы, күреү нервыһы һәм селтәрле шекәрә сирҙәрен дауалау проблемалары буйынса фекер алышыуҙар, күрһәтмә-операциялар булды. Исемдәре донъя кимәлендә билдәле офтальмологтар Е. Егоров, А. Бровкина, В. Трубилин (Мәскәү), чиптар ҡуйыу юлы менән һалма күҙ булдырыу теорияһына нигеҙ һалыусы Гельмут Сакц (Германия), мөгөҙ ҡатлауҙағы дистрофия күренештәрен дауалау ысулы авторы Альберт Дагцер (Австрия), Я. Раджашекар (Һиндостан), шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы төбәктәренән 80-гә яҡын белгес ҡатнашты. Беҙҙең институт конференция барышында мөгөҙ ҡатламдың дистрофик ауырыуҙарын махсус препарат ярҙамында ультрафиолет нурҙары менән дауалаусы инновация проекты - "Уфалинк" аппаратының эш алымдарын күрһәтте. Аппаратура бик һөҙөмтәле эшләй, ул мөгөҙ ҡатламдағы дистрофик процестарҙы туктатыуға булышлыҡ итә. Әлеге ваҡытта был методика хаҡында юғары кимәлдәрҙә һүҙ алып барыла. Уны күп илдәр һатып ала башланы. Рәсәйҙә "Уфалинк" аппаратураһына оҡшаш башҡа бер ниндәй методика ла юҡ әлегә.

**▸ Ниндәй күҙ ауырыуҙары бөгөн айырыуса киң таралған? Сәбәптәре һәм уларҙы дауалау алымдары ниндәй?**

- Күрәшлек (близорукость), ҡараһыу (глаукома), ҡара ҡылау (катаракта) иң күп таралған күҙ ауырыуҙары. Сирләүселәр һаны яғынан өсөнсө урында торһа ла күреү буйынса инвалидлыҡ сәбәптәре араһында глаукома беренсе урын биләй. Ул күҙ эсе баҫымы юғары булыу менән билдәләнә, дауаламағанда мотлаҡ һуҡырлыҡҡа килтерә. Уны күп йылдар дауалау практикаһы, һуңғы 30 йылда барлыҡҡа килгән дарыу препараттары операцияны бер аҙ кисектереп торһа ла, ауырыуҙар һанын бер ҙә кәметә алмай.

Катаракта булғанда тоноҡланған күҙ яҫмағын яһалмаһы менән алыштырып, күреү һәләтен ҡайтарып булһа, глаукома кире ҡайтарғыһыҙ процесс, шуға күрә бында иң мөһиме - сирҙе ваҡытында асыҡлау, шунын өсөн күреү һәләте насарлана башлаһа, кисекмәҫтән күҙ врачына күренеү кәрәк. Һәм, ғөмүмән, йылына 1-2 тапҡыр врачтарға күренеүҙе яҡшы ғәҙәттәрҙең береһе итеп алыу бер кемгә лә ҡамасауламаҫ ине. Был айырыуса өлкән йәштәгеләргә ҡағыла. Глаукоманы кисектереүҙең тағы бер сараһы бар. Ул да булһа, ауырыуҙың врач менән килешеп, кәңәшләшеп дауаланыуы. Күҙҙәргә күпмелер миҡдарҙа күпмелер ваҡыт һайын дарыу тамыҙып йәшәүе бигүк уңайлы сара булмаһа ла, ул дауаланыу һөҙөмтәлелеген 60-70 процентҡа еткерә.

Күрәшлек проблемаһы шулай уҡ бик күп таралған, сирләүселәр һаны буйынса ул өлкәндәр араһында беренсе урында торһа, балалар араһында өсөнсө-дүртенсе урында. Төп сәбәп үтә ябай тойолһа ла бик мөһим булған режим ҡағиҙәләрен үтәмәү. Бигерәк тә балаларҙың көндәр буйына телевизор, компьютерға ҡапланып ултырыуы, хәрәкәтләнмәүе, файҙалы ял итә белмәүе уларҙы ошо хәлгә килтерә. Ә бит гигиена ҡағиҙәләре бик ябай: уҡығанда китапты күҙҙәрҙән 30 см арала тоторға; компьютерҙа эшләгәндә һәр 45 минут һайын ял итеп алырға, ә иң яҡшыһы күҙҙәр өсөн махсус күнегеүҙәр яһарға.

**▸ Ҡара ҡылау йәки катаракта өлкәндәрҙә генә түгел, ә балаларҙа ла була икән. Был нимә менән бәйле?**

- Был патология сабыйҙарҙа тыумыштан була. Беренсенән, әгәр ғаиләлә берәйһенең ошондай уҡ диагнозы булған икән, нәҫелдән килә. Икенсенән, ауырлы ваҡытында әсә берәй төрлө йоғошло сир (ҡыҙылса, герпес, цитомегаловирусли инфекция, ҡыҙамыҡ, грипп һ.б.) менән ауырыһа, радиация тәьҫиренә дусар ителһә, көслө препараттар ҡабул иткән булһа, баланың тыумыштан катаракта сире менән донъяға килеүе ихтимал. Әлегә асыҡланмаған сәбәптәр менән ул ҡайны саҡ сәләмәт ата-әсәләрҙән тыуған сабыйҙарҙа ла күҙәтелә. Бындай осраҡта балаға операция яһап, тоноҡ хрусталикты яһалмаһы менән алмаштырырға тура килә. Тыумыштан катарактаны дауалау буйынса балалар офтальмологтарының Өфө мәктәбе тәжрибәһе уникаль күренеш. 1970 йылдарҙа бер нисә аҙналыҡ ҡына сабыйҙарҙа тыумыштан катаракта буйынса операция СССР-ҙа тәүге тапҡыр профессор, БР Фәндәр академияһы мөхбир-ағзаһы Мар Аҙнабаев тарафынан яһала башланы. Әлеге ваҡытта беҙҙең институтта йылына 100-гә яҡын ошондай операция яһала, сабыйҙарға яҡшы оптикалы сифатлы сит ил линзалары ҡуйыла. Әйткәндәй, улар бик ҡиммәт, 25 меңгә барып баҫа. Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса республика фонды иҫәбенә уны кескәй пациенттарға бушлай ҡуйыу мөмкинлеге бирелә.

**▸ Хәтерләүемсә, күҙ ауырыуҙары институтына эләгеү өсөн оҙон-оҙон сираттар көтөргә, әллә күпме кабинеттарға инеп сығырға, ҡыҫҡаһы, "сират күпере" үтергә тура килә ине. Был аңлашыла ла, сөнки ауырыуҙар ҙа күп. Улар республикабыҙ ҡалаларайондарынан ғына түгел, сит өлкәләрҙән дә байтаҡ килә. Ошо йәһәттән хәлде бер аҙ еңеләйтеү йүнәлешендә ниндәй ойоштороу саралары күрелә?**

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ, ауырыуҙар бик күп. Йыл һайын институтта 70-ләп мең ауырыуға консультатив ярҙам күрһәтелһә, 26-28 меңләп операция яһала. Операцияға сиратта тороусылар күп. Шуға күрә институттың ауырыуҙарҙы ҡабул итеү мөмкинлеген арттырырға тырышабыҙ. Ошо йәһәттән 20 койка-урынлыҡ көндөҙгө стационар астыҡ. Ҡабул итеү ваҡытын, ҡағыҙҙар тултырыуҙы тиҙләтеү маҡсатында эштәр компьютерлаштырылды. Тиҙләтеү тигәндән, был йәһәттән беҙгә урындарҙағы медицина хеҙмәткәрҙәре, белгестәрҙән дә ярҙам кәрәк: ауырыуға институтҡа йүнәлтмә биргәндә уларҙың документтарын етешле итеп әҙерләп ебәрһендәр ине. Был бигерәк тә анализдарға ҡағыла, унан-бынан, ашыҡ-бошоҡ, иҫке күрһәткестәр яҙылмаһын. Иң мөһиме - ауырыуҙар йәшәгән урындарында күҙ врачына даими күренеп торһон.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Баш табип янынан сығыуға, сиратым килеп тә еткәндәр инде тип, әлеге 210-сы кабинет янына ашыҡтым. Һәм, беләһегеҙме, бер сәғәт эсендә минең сираттан "елдәр" иҫкән! Баш табип хаҡлы булған, тимәк: сираттарҙың "тиҙлеге" һиҙелерлек арта төшкән. Был яҡшы, әлбиттә. Ләкин ауырыуҙарҙың күплеге генә һәйбәт түгел, сөнки баяғы сират урынына яңыһы пәйҙә булған. Баш табиптың, үкенескә ҡаршы, күптәр эш һуңғы сиккә килеп еткәс кенә Өфөгә юллана, тигән һүҙҙәре лә хаҡтыр, күрәһең.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әңгәмәләште.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ИМАН ҠЕҮӘТЕ,

## йәки Мөхәммәт бәйғәмбәр өлгөһөнөң уйландырғаны



### Күк юғарылығынан уның күңел тәрәнлеге

Бөтәһенән элек, уның иман ныҡлығы - бындай кешегә бөтөн донъяны бирһәң дә ҡыуанмаясаҡ, һәм шулай уҡ, әгәр ҙә бөтөн донъя уның ҡулынан китһә лә - ул ҡайғырмаясаҡ. Тәҡүәлек, иман ҡеүәте Рәсүлдә иң юғары бейеклектә ине. Бөтөн донъя уның ҡулында булған хәлдә лә Рәсүл быға бер арпа бөртөгө тапҡан ише генә ҡыуаныс кисерер ине. Ҡапыл бар донъя ҡулынан ысҡынһа, быға ла ул ни бары бер арпа бөртөгөн юғалтҡан ише генә көйөр ине. Фани донъяны йөрәге менән бына шулай ғына ҡабул итте. Ошолай ҡабул итеүе донъяны һис кенә лә кире ҡағыу түгел. Сөнки ул беҙгә был донъяла дөрөҫ йәшәүҙең иң хәйерле, иң аҡыллы юлдарын күрһәтте. Шуға ла был донъяны бөтөнләй инҡар итте тип уйлау дөрөҫ түгел, сөнки ул бит кешеләрҙе йәшәүгә, тормошҡа әртләндерҙе. Бының асыҡ дәлиле: Аллаһ Рәсүле нигеҙләгән Ислам дәүләте ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә донъялағы иң бай һәм иң ҡеүәтле дәүләткә әйләнде. Көнбайыштың бер фекер эйәһе әйтмешләй, һуңынан Аллаһ Рәсүле нигеҙләгән ошо бер дәүләттән ҙурҙаренең бөйөклөгө менән империяларға тиң булған егерме биш яңы дәүләт барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, Бөйөк Осман империяһы шуларҙың береһе генә.

Аллаһ Рәсүле яҡты бәйғәмбәрлек юлына баҫҡандан һуң да, бар донъя бөтә матурлығында һәм хозурлығында уның аяҡ аҫтына түшәлгәндә лә үҙенә бер тапҡыр ҙа хыянат итмәне. Был донъянан киткән сағында хатта тыуған саҡта мираҫ менән бирелгән мөлкәте лә юҡ ине. Сөнки бөтә булған нәмәһен ул фәҡирҙәргә таратты. Вафатынан һуң ҡалған нәмәләргә иғтибар итегеҙ - бер нисә кәзә һәм ҡатындары йәшәгән бәләкәй генә бүлмәләр. Хатта ошо бүлмәләр ҙә йәмғиәттеке ине. Ҡатындары вафатынан һуң бүлмәләр мәсеткә бирелде. Күреүселәр был бүлмәләрҙең мәсет мөйөшөндә бик бәләкәй генә урын биләгәнен һөйләй.

### Рәсүлдең иҙәндә һалам түшәктә йоҡлап йөрөгәне

Бер мәл Аллаһ Рәсүлен күрергә тип Ғүмәр хәҙрәт (р.ғ.) килә. Бәйғәмбәр үҙе йоҡлап йөрөгән һалам түшәктә ята, ә янғында түшәктең һырҙары ҡалған. Бүлмәнең бер мөйөшөндә - эшкәртелгән тиреләр, икенсеһендә бер нисә ус арпа һалынған һауыт тора. Был хәлде күргән Ғүмәр хәҙрәтең (р.ғ.) күҙенән йәше бәреп сыға. Аллаһ Рәсүле уның ни өсөн илауын һорай. Ғүмәр (р.ғ.) яуап бирә: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Был мәлдә хосрой (батша) һәм цезарь үҙҙәренең һарайҙарында мамыҡ ҫтыҡтарҙа йоҡлай, был донъя һинең өсөн яратылған булыуға ҡарамаҫтан, һин кипкән һалам түшәктә ятаһың, һалам янаҡына һыр һалған. Шул хәлгә нисек иламайһың". Шул саҡта Аллаһ Рәсүле Ғүмәргә (р.ғ.) әйтә: "И Ғүмәр! Һин был донъя уларҙыҡы булыуын, ә беҙгә мәңгелек донъя насип булыуын теләмәйһеңме ни?" Икенсе хәҙистә яуабы шулайыраҡ яңғырай: "Был фани донъяла эшем юҡ. Мин ағас күләгәһенә килеп ултырған һәм тиҙҙән үҙ юлын дауам итергә тейешле юлсы бәрәбәрендәмен..."

Ул был донъяға рәсүллеген атҡарыр өсөн килде. Ул кешеләрҙең фекеренә һәм хис-тойғоларына тере һулыш алып килде. Рәсүллеген үтәгәндән һуң, фанилыҡты ташлап китергә тейеш ине. Был донъя менән бер нисек тә бәйләнмәгән кешенең ниндәйҙер шәһүәләргә, алдатҡысәүрәткестәргә ҡыҙығыуы бөтөнләй мөмкин булмаған хәл. Төп хәҡиҡәт шунда, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) бер ҡасан да фани донъяның шәһүәләренә алданманы, рәсүллегенән тайпылманы.

### Саҙаҡа мәсьәләһенә мөнәсәбәте

"Кис ятты, ләкин иртәнсәккә тиклем йоҡоға китә алманы, тулғанды, ауыр көрһөндө. Иртәнсәк ҡатыны һораны: "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Төнөн бик тынғыһыҙландығыҙ. Нимә һеҙҙе тынысльҡтан яҙҙырҙы?". Ә уның яуабы бына шулай: "Түшәк йәйгән саҡта бер хөрмә табып алғайным. Шуны ашаным. Аҙаҡ өйҙә саҙаҡаға һәм зәкәткә тигән хөрмә барлығы иҫемә килеп төштө. Әгәр ҙә шул хөрмәләрҙең береһен ҡапҡан булһам! Таң атҡансы ошо турала уйлап ғазапландым, шуға ла йоҡоға китә алманым".

Саҙаҡаға һәм зәкәткә тигән ризыҡ уның өсөн харам була. Ләкин был хөрмәнең уға бүләк итеп бирелеүе лә ихтимал бит. Шулай булыуына шик юҡ. Сөнки саҙаҡаға тигән ризыҡты бында төнгә тиклем ҡалдырмағандар, уларҙы килтереү менән шундуҡ таратырға ашыҡҡандар. Ауыҙға алған бер ризығы өсөн шундай хафа, икеләнеү аша ут йотҡан һәм бөтөн ғүмерен ошолай үткәргән кешенең ниндәйҙер яҙыҡлыҡҡа барыуы мөмкинме? Шөбһәләнеп, харам ҡылыуҙан ҡурҡып, унан һаҡланып йәшәгән, хатта аҙ ғына шик тыуҙырырҙай эш менән күңеленә күләгә төшөрмәгән. Бындай көслө ихтыяр гонаһҡа бармаҫы? Юҡ, ул бер ҡасан да ҡыҙыҡтырғыстарға әүрәмәне, йәненә бер ниндәй ҙә харам эш, гонаһ өсөн юл күрһәтмәне. Уның рухы һәм ихтыяры һәр саҡ юғары дәрәжәлә саф, таҙа, пак ине, ул шулай йәшәне һәм Хаҡ Тәғәлә янына ла шулай китте.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## ерҙәге ожмах сағылышы ул



**Ғаилә ҡорған ир менән ҡатын бер-береһенә шатлыҡтарҙы ла, ҡайғыларҙы ла бүлешергә ант бирә. Уларҙың икеһе лә иң беренсе нимәгә иғтибар йүнәлтергә тейеш?**

Бында ике шартты иғтибарға алырға кәрәк: бер-береңменән бәхет һәм шатлыҡты уртаҡлашырға; бер-береңменән ауырлыҡтарҙы һәм ҡайғы-хәсрәттәрҙе бүлешергә. Яҙмыш - Аллаһы Тәғәләнең бөйөк сере. Шуға күрә Аллаһы Тәғәләгә иман беренсе терәк-таяныс сығанағы булып тора. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: ҡотолғоһоҙ хәлгә юлыҡҡан кеше, әгәр үҙенең ғаиләһендә терәк таба алмаһа, ул тағы ла ҙурыраҡ эске емерелеүҙәргә юлығыуы бар. Шулай ҙа кешене ныҡлы иманлы һәм үҙен аңлаған кешеләр уратып алһа, уға өләшөнә төшкән һынауҙарҙы үтеүе еңелерәк буласаҡ.

Ир менән ҡатын икеһе лә тырышҡан хәлдә генә ғаилә бәхетенә өлгәшә. Ә бының нигеҙе - тынышып йәшәү, берберенде аңлау. Имен ғаилә төҙөр өсөн шулай уҡ тәрбиәлелек, зирәклек, аҡыл, иман, ышаныс кеүек сифаттар, һәм, әлбиттә, бер-береңә ҡарата булған тойғолар мөһим. Бындай сифаттар ир-егеттә лә, ҡатын-ҡыҙҙа ла булырға, һәм, ҡағиҙә булараҡ, ғаиләнең ауыр һынылышлы осоронда улар көсәйергә тейеш.

Мөхәббәткә килгәндә, ул һәр ғаиләнең "ойотҡоһо". Мөхәббәт булмаған ғаиләләрҙе емерелеүҙәр көтә. Мөхәббәт көслөрәк булған һайын, һүҙҙәр һәм аҙымдар нәзәкәтлерәк була бара, ә ир менән ҡатындың тәртибе һәм зирәклеге бер-береһенә булған тойғолар менән күркәмләнә. Һис шикһеҙ, мөхәббәт тотанаҡһыҙ булырға тейеш түгел, ир менән ҡатынға әҙәп ҡағиҙәләрен дә онотorға ярамай. Мөхәббәттә, йәлләүҙә һәм башҡа ошондай тойғоларҙа сама булырға тейеш. Артыҡ тойғолар бер-береһен һөйгәндәргә зыян килтереүе, шулай уҡ мөхәббәт етмәүе уларҙы уны ситтән эҙләргә мәжбүр итеүе ихтимал. Мөхәббәттең аҙғын күренештәре, мәҫәлән, артыҡ ҡыҙғаныу һәм ирекһеҙләү ир менән ҡатындың бер-береһенә булған ихтирамын юғалтыуға һәм ҙур ғаилә бәхетһеҙлектәренә алып килеүе мөмкин. Артыҡ йәлләү кешене көсһөҙгә әйләндерә, хатта иң ҙур яҙыҡ эштәрҙе һәм етешһеҙлектәрҙе лә уйҙырма дәрәжәгә әйләндерә. Был осраҡта инде ул шәфҡәтлелек түгел, ә рухи көсһөҙлөк. Икенсе яҡтан, шәфҡәтлелек етмәүе йөрәктәрҙе ҡатыландыра, ә кешене ғәҙелһеҙлеккә алып килә. Был мәсьәләлә алтын урталыҡ ғаиләгә тик бәхет кенә алып килә.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Фекерҙе саҡ ҡына үҙгәртһәк...

Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоп, тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ. Һуңынан раҫлауҙы инҡар итеү менән алыштырығыҙ. Уйығыҙҙан ғына "Мин шундай-шундай" урынына: "Мин хәҙер ундай түгел", - тип ҡабатлағыҙ.

Ваҡыты-ваҡыты менән бындай раҫлауҙы рухи һәм физик яҡтан ныҡытығыҙ: көсәргәнештән арынып, аффирмацияны ҡабатлағыҙ, һуңынан ыңғай фекерләүегеҙҙе билдәләүсе ғәмәлдәр эшләгеҙ. Хәҙер уларҙың ҡайһы берҙәре сәйер күренер, әммә үҙ-үҙегеҙгә раҫлауҙан һуң уларҙың мәғәнәһен аңларһығыҙ:

- ресторанда кем өсөндөр түләгеҙ;
- көтөп торорға мөмкин булған иҫәпте алдан түләп ҡуйығыҙ;
- "сәйлек"те мул бирегеҙ;
- яңы эшләпә йәки галстук һатып алығыҙ;
- мәрхәмәтлек өсөн аҡса бирегеҙ;
- икенсе кешенең финанс уңышы тураһында маҡтау һүҙҙәре әйтегеҙ.

Әгәр быларҙы үкенесһеҙ эшләй алмаһағыҙ, тимәк, һаман да Йыһан байлығына үҙегеҙҙең юлығыҙҙы ҡәртәләйһегеҙ. Тағы ла бер ҡат үҙегеҙ менән һөйләшегеҙ, йәғни көсөргәнештән арынып, ыңғай аффирмацияларҙы ҡабатлағыҙ.

Нисек үҙендә бай булырға өгөтләргә?

Көсөргәнештән арынып һәм күҙҙәрегеҙҙе йомоп, үҙегеҙгә ныгыраҡ тәьҫир иткән аффирмацияны ҡабатлағыҙ. Уны бер нисә көн дауамында көнөнә бер нисә тапҡыр эшләгеҙ:

Хәҙер әйтәсәк һүҙҙәрем миңә сәләмәтлек, бәхет һәм уңыш алып килә. Мин үҙемде Илаһҡа ижади канал рәүешендә күрһәтәм.

Мин үҙемдә тормош байлығы сағылыштарына - Илаһҡа тоғролоғомдоң туранан-тура эҙемтәһенә бағышлайым.

Мин аҡыллыларҙың-аҡыллыһы, бөтөн нәмә ҡулымдан килә, көслөләрҙең-көслөһө, сөнки мине сикһеҙ аҡыл йүнәлтә һәм Илаһи мөхәббәт хуплай.

Аффирмацияларҙың береһен һайлап алып, уны иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм көсөргәнештән арынып, өс тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Йыһан, һеҙ тормошоғоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырышҡан һайын, ҡул саба: күңелле тап килеүҙәр, синхронлыҡ, бәләкәй "мөғжизәләр" менән осраша башлайһығыҙ. Уларҙы Илаһ эшләй. Тап килеү - уның йәшерен кенә башҡарған ваҡиғаһы. Бынан тыш, һеҙҙең яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған рухи кисерештәрегеҙ барлыҡҡа киләсәк.

Кемдер: "Әгәр башың - күктә, аяғың ерҙә икән, уларҙы бергә тоташтыр", - тигән. Мин бының менән килешмәйем. Һеҙ былай ҙа "тоташҡанһығыҙ", Һеҙҙең Илаһ менән бәйләнешегеҙ бар. Уйығыҙҙа ғына уның менән һөйләшеү ҙә һеҙгә көн һайын байлыҡ килтерә.

Джолиға 23 йәш булғанда ул ҡунаҡхана хужаһы була, әммә бөлә. Интуитив рәүештә ул үҙенең был финанс уңышһыҙлығының тормошон мәңгелеккә боҙоуына юл ҡуймаҫҡа тейешлеген аңлай. Көсөргәнештән арынып, үҙен ыңғайға көйләй башлай.

Һуңынан "Сильва ысулы: етәкселәр өсөн үҙең өҫтөнән власть" тигән китап уҡый. Тиҙҙән ул һатыу буйынса директор урынын биләй һәм, китапта бирелгән кәңәштәр ярҙамында һатыусыларҙың көслө төркөмдәрен ойоштора башлай.

**Роберт СТОУН.**



## 23 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Выхожу тебя искать", 9-я серия. Сериал
22.30 "Анатолий Карпов. Все ходы записаны". Док. фильм
23.30 Ночные новости
23.50 "Следствие по телу", 11-я серия
00.40 "Тихий дом"
01.10 "Смокинг"
03.00 Новости
03.05 "Пикник"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Запрещенный концерт. Немузыкальная история"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 59-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 86-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 161-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Достоевский", 3-я серия. Сериал
22.05 "Бригада", 1-я и 2-я серии. Сериал
00.10 "Вести+"
00.30 "Киновойны по-советски"
01.20 "Профилактика"
02.30 "Был месяц май"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Центральный округ-3". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "До суда"
03.45 "Прокурорская проверка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Забытые войны. "Витязь в тигровом галстуке"**
